ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 август (урағай) 2022

№33 (1023)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыбыҙ! Шулай итеп, гәзит-журналдарға яҙылыуҙың икенсе миҙгеле бара: 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 718 һум 98 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Пенсия йәше...**
тауҙар артында түгел



5

**Башҡорт телен өйрәнеүме?**
Ул заман менән бергә алға атлай



7

**Барыбыҙ ҙа уҡытыусылар!**



10

**Хужабикәләрҙең...**
урағай мәшәҡәттәре



12

**ТВ-программа** 14

БЫНАҒАЙЫШ!

# БАЛА БАҠМАҠ - ЙӘН СЫҠМАҠ



**Был мәҡәләне яҙырға ултырғанда ғына смартфонға Ҡариҙел районынан күңелһеҙ хәбәр килеп төштө: Бөрө - Таҙтүбә-Сатҡы трассаһы буйлап Mazda машинаһында килеүсе 36 йәшлек ҡатын идараны юғалта һәм юл ситендәге канауға осоп барып төшә һәм шундуҡ йән бирә, ә етди йәрәхәттәр алған 11 йәшлек улы санавиация менән ашығыс рәүештә Өфө дауаханаһына килтерелә.**

Бындай бәлә-ҡазалар хаҡында гәзитебеҙҙең үткән ике һанында материалдар бирелгәйне инде, әммә үлемесле фажиғәләр сылбыры һис өҙөләргә оҡшамай, бер ҡасан булмағанса йышлыҡ менән һаман дауам итә. Иң үкенеслеһе шул: өлкәндәрҙең иғтибарһыҙлығы, ҡайһы саҡта хатта ғәфү иткеһеҙ битарафлығы арҡаһында балалар менән булып торған һәләкәттәр. Әле әйтелгән Ҡариҙел фажиғәһендә лә бит балаһын ултыртып алған әсәгә ниҙер ҡамасаулай. Әгәр рулдә үҙеңде ышанысլы тоймайһың, телефоныңдан айырыла алмайһың, йә булмаһа, тиҙлек яратаһың икән, ниңә күрәләтә хәүеф-хәтәргә дусар итеп, баланды ултыртып алырға?

Ошо ваҡытҡа Яндекста Сибайҙан да бер хәбәр баҫылды: Түмәндән ҡартатаһы менән өләсәһенә йәйге ялға килгән 10 йәшлек ҡыҙыҡайҙы мотоциклы менән бәреп үлтергән 20 йәшлек егеткә хөкөм ҡарары сығарылды: тиҙлек яратыусы 6 йылға иркенән мәхрүм ителде. Үҙегеҙ ҙә аңлап торааһығыҙҙыр: енәйәтсене төрмәгә ябыу менән дә, зыян күреүселәргә миллионлап аҡса түләтеү ҙә балаһын юғалтыусыларҙың йөрәк яраһын төҙәтә алмаясаҡ, әлбиттә, сөнки зыян күреүселәр балаларын юғалтыуҙа үҙ ғәйептәрен дә таный һәм бының өсөн улар ғүмерлек ғазап кисерәсәк бит. Әлеге электр самокатында йөрөгән 10 йәшлек ҡунаҡ ҡыҙҙы алыҫ ергә ялға ебәрерҙән алда ата-әсә өгөт-нәсихәт уҡыманымы ла, ҡартатаһы менән өләсәһе күҙ яҙҙырмай ҡарап торманымы икән ни, тигән һорау тыуа. Бала ни тиклем үҙаллылыҡҡа ынтылған хәлдә лә, уларҙың ҙурына ла, бәләкәсенә лә өҙлөкһеҙ ҡараууыл кәрәк. Ә бала ҡарау еңел эш түгел, юҡҡамы ни бының өсөн хөкүмәт аҡса түләй ата-әсәгә: бала ҡараған өсөн!

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# КИТАП УҠЫ!



**Ә һеҙ китап уҡыуҙың стресҡа ҡарата иң яҡшы көрәш ысулы икәнен белә инегеҙме?**

1936 йылда фәнни ҡулланылышҡа ингән был һүҙ инглиз теленән тәржемә иткәндә "көсөргәнеш" тигәнде аңлата. Был көсөргәнеш - организмдың ниндәйҙер тышҡы экстремаль факторҙарға яуабы. Стресс хәле адреналин сығарыуға булышлыҡ итә һәм беҙҙең организм дошман менән көрәшеү йәки унан ҡасыу өсөн тиҙ генә хәрәкәткә килә. Ләкин беҙ тәүтормош кешеләре түгел һәм проблемаларҙы физик көстәр йәки ҡасыу менән хәл итмәйбеҙ. Беҙҙең организм буйлап ҡулланылмаған гормондар хәрәкәт итә һәм нервылар системаһына тынысланырға ирек бирмәй. Стрестан ҡасыу мөмкин түгел, ләкин уны еңергә була. Ғалимдар тикшеренеүҙәр уҙғарып, ҡыҙыҡлы асыштар яһаған. Баҡтиһәң, музыка тыңлау стресс кимәлен 61 процентҡа, бер сынаяҡ сәй йәки кофе 54 процентҡа, саф һауала йөрөү 42 процентҡа, уйындар тик 21 процентҡа төшөрә икән. Ә бына ни бары 6 минут шым ғына китап уҡыу стресҡа ҡаршы иң яҡшы дарыу булып тора. Тикшеренеүҙәр авторы Дэвид Льюис, ниндәй китап уҡыу мөһим түгел, иң мөһиме, уға тулыһынса бирелеү, тип һанай. Китап геройҙарының проблемаларына бирелеп, кеше үҙенекен онота икән.

КӨНАУАЗ

# МӘКТӘП КЕЙЕМЕ...

## бер төрлөмө, төрлө-төрлөмө?

**Август айы ата-әсәләрҙең балаларҙы мәктәпкә әҙерләү мәшәҡәте менән янып йөрөгән мәле. Мәктәп кейеме, канцелярия, китап һәм башҡа кәрәк-яраҡтарын әҙерләүҙәге иң ҙур сығым, әлбиәттә, уҡыу йортонда ҡабул ителгән берҙәм мәктәп формаһын алыуға тотонола. Ҡасандыр бөтә мәктәп уҡыусылары бер төрлө кейемдә йөрөнө, унан һуң ирекле кейемдәрҙә белем алдыҡ һәм һуңғы ваҡытта уҡыусылар өсөн тағы ла берҙәм мәктәп формаһы булдырылды. Төрлө бәхәстәр тыуҙырған берҙәм мәктәп формаһы бөгөнгө көндә ысынлап та кәрәкме, әллә бындай талап уҡыусыларҙы сикләйме?**



**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*



# ҠУЛЫҢ ОҪТА БУЛҺА...

## килем дә булыр

**Мин ауылда тыуып-үҫкән кеше булараҡ, баш ҡалаға килеп йәшәй башлағас та ҡала ситендә ағас йорт һалып инеү хыялы менән яндым һәм ике йыл элек, ниһайәт, уны тормошҡа ашырҙым. Ҡаланың тынсыу фатирынан һуң иркен, саф һауалы, ағас еҫе борҡоп торған йортта йәшәү үҙе бер рәхәтлек. Шәхси йорт тигәндә, уны ғүмер буйы төҙәйһең дә төҙәтәһең бит инде, шуға күрә ялдарым ихатала эш менән үтә.**

Мәҫәлән, өсөнсө йәй инде сәй эсеү, шешлек ҡыҙҙырыу, ғөмүмән, тышта ял итеү урыны эшләү менән булыштым. Ике ай буйы эшләнем беседканы. Ике ҡатлы иттем һәм оттом, сөнки ҡунаҡҡа килгән һәр кем ошондай уҡ беседка эшләп биреүемде һораны. Шулай уйламағанда үҙемә килемле генә өҫтәмә эш таптым.

Ике ҡатлы беседкалар күп функциялы булыуҙары менән отошло. Унда йәйгеһен генә түгел, ә ҡышын да ҡулланып була торған зоналар эшләргә мөмкин. Шулай уҡ ололар һәм балалар зонаһын айырым бүлергә лә була. Икенсе ҡатын быяла менән көпләгәндә йәки бөтөнләй асыҡ ҡалдырғанда йәйге миҙгелдә ҡояш ҡалҡыуын һәм батыуын күҙәтергә мөмкин, ә бейек ағастар аҫтында ултырған беседка һәр ваҡыт ҡоштар һайрауына күмелә.

Ләкин тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән беседканы эшләүҙең дә үҙ нескәлектәре бар. Ул ихатаның айырылғыһыҙ һәм мөһим элементы булараҡ йортҡа ла тап килеп торорға, дизайны ла матур булырға тейеш. Ихата әллә ни ҙур түгел икән, ифрат ҙур беседка эшләп ҡуйыу килешмәй. Шулай уҡ уның бейеклеге лә әллә ни ҙур булмаҫҡа тейеш. Ә ҙур ихатала иһә бәләкәй генә беседка юғалып ҡаласаҡ.

Беседканы төрлө формала эшләргә мөмкин. Мәҫәлән, диңгеҙҙә хеҙмәт итеүселәр уны яхта формаһында эшләргә заказ бирә һәм башҡалар.

Эш барышын тәфсирләп яҙып тормайым, уны оҫта ҡулдар үҙҙәре лә яҡшы белә йәки интернеттан ҡарарға була. Иң мөһиме, ике ҡатлы беседкалар эшләп, ғаилә бюджетына өҫтәмә килем килтерергә була.

**Зөлфәр КӘЛИМУЛЛИН.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# БАЛА БАҠМАҠ - ЙӘН СЫҠМАҠ

**(Башы 1-се биттә).**

Был бигерәк тә бәләкәй бала ҡарағандарға ҡағыла, сөнки өйҙә ултырып та балаһы менән бәхетһеҙлек осрағына тарығандар бик күп. Мәҫәлән, һуңғы осор кескәйҙәрҙең күп ҡатлы йорт тәҙрәләренән осоп төшөү факттары йышайып китте. Үҙәк матбуғат был күренешкә "детопад" тип атама ла сәпәп ҡуйҙы хатта. Мәҫәлән, ошо араларҙа, 4 августа ғына булған хәл: Өфөнөң Черниковка биҫтәһендәге 5 ҡатлы йорт тәҙрәһенән 2 йәшлек бала йығылып төшә. Сабый ҡолағанда фәрештәләр ҡанат ҡуйып торор, тигәндәре дөрөҫтөр, ахыры: бәхеткә, бала иҫән ҡала, ләкин йәрәхәттәр менән дауаханаға килтерелә. Шуныһы ла ғәжәп: бала өйҙә яңғыҙы булмаған, тик, әлеге лә баяғы, ҡарауыл, хәстәрләү етмәгән. Асыҡ тәҙрә төбөнә нисек килеп эләккәндер, әммә себендән һаҡлағыс сеткаға таянып, йығылып төшә. Яҙмыштың үсал шаярыуымылыр - тап ошо көндә Дүртөйлө районында ла 4 йәшлек бала 4-се ҡаттан йығыла. Тап шундай уҡ хәл 30 июндә Өфөнөң Борисоглебский урамындағы йортта ла ҡабатлана: 2 йәшлек бала 5-се ҡаттан баяғы сеткаға таянып, ҡолап төшә. Ә был ваҡыт тағы бер сабыйҙы - имсәк балаһын ҡараусы әсәһе өйҙә була...

Хәйер, бындай осраҡтарҙы һанап сығыуҙан фәтүә юҡтыр, әммә ата-әсәләр һәм балаларҙың туғандары һабаҡ алыр, бәлки, сөнки республика буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлү-мәттәренә ҡарағанда, былтыр 302 бала тәҙрәнән ҡолап төшкән булһа, быйыл тәүге ярты йыллыҡта улар һаны 117-гә еткән, өс бала һәләк булған. Шундай һәләкәттәрҙең береһе 3 йәшлек ҡыҙ бала менән була, ул... 10-сы ҡаттан йығылып үлә. Былтыр мартта 12-се ҡаттан ҡолаған 5 йәшлек малай ҡар өҫтөнә барып төшкәнлектән генә иҫән ҡала, ә быйыл, ҡыҙғанысҡа, апрелдә Нефтекамалағы йортта әсәһе менән өйҙә булған 2 йәшлек сабый бишенсе ҡаттан йығылып үлә.

Бындай хәлдәр беҙҙә генә түгел, бөтөн Рәсәй кимәлендә таралған. Мәҫәлән, быйыл ярты йыл эсендә Мәскәү өлкәһендә генә лә 55 бала тәҙрәнән ҡолап төшкән, шуларҙың 11-е һәләк булған. Үткән аҙнала Дағстанда балалар менән ҡот осҡос һәләкәт була. 4 йәшлек малай 2 йәшлек һеңлеһе менән әллә йәшенмәк уйнап, әллә эҫенән ҡасып, өйҙәре янында торған автомашинаға инеп ултыралар һәм кире сыға алмайҙар, сөнки ишектәр автоматик рәүештә бикләнә. Өлкәндәр пыр туҙып эҙләһә лә таба алмайҙар, ә бикле торған машинаны асып ҡараусы булмай, етмәһә, машина тәҙрәләре ҡараңғылатылған була. Һөҙөмтәлә ике бала ла машина эсендә тонсоғоп үлә.

**Сәбәп ниҙә һуң? Ҡайһы берәүҙәрҙең фекеренсә, бала ҡазалары имен булмаған ғаиләләрҙә генә була тип уйлаһа, яңылыша икән. Ҡотҡарыусылар һәм балалар хоҡуҡтарын яҡлаусылар белдереүенсә, бәлә-ҡазаларҙың күпселеге ҡәҙимге һәм ғәҙәттәге ҡәнәғәтләнерлек шарттарҙа йәшәүсе ғаиләләрҙә килеп сыға. Хатта ки балаларҙың тәҙрәнән осоп төшөү осраҡтарының 90 проценты имен ғаиләләр өлөшөнә тура килә, өҫтәүенә, күпселеген - өлкәндәр өйҙә саҡта!**

Атай йә әсә кеше балаһынан иғтибарын ситкә йүнәлткән саҡта була бәхетһеҙлек: улар иркенләп һәм оҙаҡ итеп телефондан һөйләшә, аш бүлмәһендә мәшәҡәтләнә йә ванна-туалетҡа инеп китә, ә фажиғә тап шундай мәлдә генә көтөп тора ла инде... Бигерәк тә тәҙрә асыҡ килеш ҡалдырылһа, был мотлаҡ баланың иғтибарын йәлеп итәсәк, ул имгәкләп булһа ла тәҙрә янындағы диван йә өҫтәлгә үрмәләп менәсәк һәм артабан ҡазаға бер генә ынтылыш йә хәрәкәт тә етә.

Әйткәндәй, күптәр тәҙрәгә ҡуйылған әлеге себендән һаҡлағыс сетканы ... ғәйепләй икән! Быныһы инде бөтөнләй мәғәнәһеҙлек. Алдараҡ әйтеп кителеүенсә, бәхетһеҙлек осраҡтары теләһә ҡайһы шарттарҙа һағалай ҡарауһыҙ баланы. Айырыуса йәйге ял, каникул осоронда, балалар лагерҙарында, тәбиғәттә, һыу буйында, урамда һәм хатта тыуған өйөндә йә йорто янында ла. Әгәр был ваҡытта ул балаларҙың атаәсәһе ниндәйҙер "мөһимерәк" эштәре менән мәшғүл икән, ҡоторған эттәр талаймы, янғында һәләк буламы, батып үләме, ярамаған емеш-бәшмәктән ағыуланамы, машина тапаймы, маньяҡ ҡулына эләгәме - бәлә ҡотолғоһоҙға әйләнә. Баланан да мөһим эш юҡлығын аңлап етмәгәндәргә, шулай уҡ балаларҙың опекундары, уллыҡҡа һәм ҡыҙ итеп алған кешеләргә ҡарата үҙ бурыстарын тейешле башҡармағандары, балаларҙы ҡарауһыҙ ҡалдырып, ҡазаға юлыҡтырғандары өсөн енәйәт һәм административ яуаплылыҡ саралары ҡаралған. Был исемлеккә шулай уҡ балалар учреждениелары хеҙмәткәрҙәрен дә индерергә була. Ярай, сараһын да күрерҙәр, штрафын, компенсацияһын да түләтерҙәр, тик балаларҙы ғына ҡайтара алмаҫтар. Халыҡ аҡылы юҡҡа ғына "Бала баҡмаҡ - йән сыҡмаҡ" тимәгәндер. Ата-әсә үҙенең туранан-тура изге бурысын, яуаплылығын аңлап тәрбиәләгәндә генә йорттарында сабыйҙарының шат тауыштары яңғырап торор. Амин, шулай булһын ғүмергә!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# УЙҘЫҢ ТЕЛЕ БАРМЫ?



**Был донъяның ҡыҙыҡ мәлдәре күп инде ул. Иҫемдә, беренсе синыфта уҡығанда рус телен өйрәнә башланыҡ. Шул саҡта башыма бер уй килде: рустар ниндәй телдә уйлай икән? Бына мин, башҡорт балаһы булараҡ, башҡорт телендә уйланам. Уйҙың теле бармы икән? Шунан рус телендә уйлап ҡарарға булдым. Юҡ, килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Барыбер тәүҙә башҡортса уйланыла, һуңынан тәржемә ителә.**

Ә әле, ологайған көндәремдә, яҡын-тирәмдә (Өфөнөң Черниковка өлөшөндә йәшәйем) башҡорттар бик һирәк осрай, шуға гел русса һөйләшергә тура килә. Шул сәбәпле, саҡ ҡына русса уйларға ла өйрәндем шикелле. Тик мин ныҡыш кешемен. 70 йәшлек инәй булһам да, китапхананан башҡорт гәзит-журналдарын алып уҡып барам. Магазинға инһәм, юрый һатыусыға башҡортса өндәшәм. Араларында мине аңлаусылар ҙа осрай. Аңламағандарына тәүҙә башҡортса өндәшәм дә үҙемдә уҡ руссаға тәржемә итәм. Әлбиттә, башҡорт булыуым менән ғорурланам һәм һәр ерҙә гүзәл башҡорт һөйләше ағылып тороуын теләйем. Шундай йомшаҡ, наҙлы бит ул башҡорт һүҙҙәре.

**Хәйер, кеше рус телендә уйлаймы, әллә бүтән телдәме - уныһы мөһим түгел. Иң мөһиме - уйҙарының ниндәй булыуы. Яҡшылыҡмы уның уйында, әллә яуызлыҡмы? Тағы ла берҙе уйлап, икенсене һөйләп, өсөнсө төрлө ҡылыҡтар ҡылмаһын ине кеше. Шундайҙар күбәйеп бара бит...**

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 18 августа яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 207 осрағы асыҡланған. Хәҙерге ваҡытта 216 пациент, шул иҫәптән 60 йәштән өлкән 144 кеше стационарҙа дауалана. Ә 1013 кеше амбулатор шарттарҙа дауалана, уларҙың 335-е - ололар. Һуңғы тәүлектә 128 кеше һауығып сыҡҡан. Коронавирустан бер үлем осрағы теркәлгән. Тәүлек эсендә 15 дауахананан тыш пневмония асыҡланған, 12 пациент һауыҡҡан.

✓Роспотребнадзор COVID-19 ныҡыраҡ таралған төбәктәрҙә битлек режимын индерергә саҡырҙы. "Яңы осраҡтарҙың аҙналыҡ күрһәткесе 100 мең кешегә 50-нән арткан төбәктәрҙә йәмәғәт урындарында битлек кейергә кәрәк", - тиелә белдереүҙә. Тәҡдимдәр яҙылған хат Роспотребнадзорҙың территориаль органдарына йүкләтелгән. Ведомство етәксеһе Анна Попова субъекттарҙың башҡарма власть органдары менән тәҡдимдәр әҙерләү бурысын йөкмәтте.

✓Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хәбәр итеүенсә, Архангел, Асҡын, Дүртөйлә, Кушнаренко, Мәләүез, Стәрлетамаҡ һәм Федоровка райондарында янғын сығыу ихтималлығы юғары. Алдағы көндәрҙә Әбйәлил, Әлшәй, Баймаҡ, Баҡалы, Бәләбәй, Балаҡатай, Белорет, Бүздәк, Бөрйән, Дыуан, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ҡариҙел, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Стәрлебаш, Туймазы, Учалы, Хәйбулла, Саҡмағош һәм Шишмә райондарында, Өфө ҡалаһында дүртенсе класлы янғын хәүефе фаразлана.

✓Өфөнән Луганск Халыҡ Республикаһына гуманитар йөк тейәлгән 22-се автоколонна юлға сыҡты. "Гуманитар ярҙам ҡәҙимгесә йәшәү мөмкинлегенән мәхрүм кешеләрҙең кискен ихтыяжын иҫәпкә алып төҙөлгән, - тине Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Ирек Сәғитов. - Тәү сиратта, аҙыҡ-түлек һәм төҙөлөш материалдары. 22-се ылауҙың тағы бер үҙенсәлеге бар. Нәфис әҙәбиәт Донбасс балаларына айырыуса оҡшар тип уйлайым".

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Украина биләмәһендә махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ефрейтор Эдуард Әхмәтовка Жуков миҙалын тапшырҙы. Ул Рәсәй Президенты указы менән яҡшы хеҙмәте өсөн бүләкләнде. Эдуард Харьков өлкәһенең Изюм ҡалаһы эргәһендәге Каменка ҡасабаһын азат иткәндә яраланған. Радий Фәрит улы Украина биләмәһендә махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарҙың хәрби тәжрибәһен дәүләт һәм граждандар хеҙмәтендә файҙаланырға ҡушты.

*КӨНАУАЗ*

# МӘКТӘП КЕЙЕМЕ...

## бер төрлөмө, төрлө-төрлөмө?

**(Башы 1-се биттә).**

Күпселек таныштарым уҡыусыларҙың мәктәптә берҙәм формала йөрөүенә ыңғай ҡараша, сөнки был балаларҙы тәртипкә өйрәтә һәм төрлө кимәлдәге ғаиләлә тәрбиәләнгән балалар араһындағы социаль тигеҙһеҙлекте юҡ итә, тип билдәләй. Шулай уҡ мәктәп формаһы баланы уйын һәм урамдағы, өйҙәге иркенлектән уҡыу ойошмаһындағы тәртип һәм талапсанлыҡҡа күсеүҙе еңеләйтереүгән дә билдәләп китергә кәрәктер. Тағы ла берҙәм мәктәп формаһы күп төрлө кейем-һалым алыуҙан, тимәк, тағы ла ҙурыраҡ сығымдарҙан ҡотҡара. Ә көн дә иртән ниндәй кейем кейҙерергә икәнен хәл итеүҙән, уны әҙерләүҙән азат итеүен иҫләгәндә, берҙәм мәктәп формаһының мөһимлеге тағы ла нығыраҡ арта.

Теге йәки был мәктәп уҡыусыларының бер төрлө мәктәп формаһында йөрөүе белем усағы биләмәһендә ят кешенең килеп сығыуына иғтибар итергә, шулай уҡ күп кеше ҡатнашлығындағы сараға барғанда уҡытыусыларға "үҙ" балаларын айырырға һәм уларҙы күҙҙән ысҡындырмаҫҡа мөмкинлек бирә.

Мәктәп формаһына ҡаршы булыусылар иһә уның балаларҙың үҙлеген сикләүен, социаль тигеҙһеҙлекте форма ярҙамында ғына юҡ итеп булмауын һәм күпселек балаларҙың мәктәпкә ирекле кейемдә йөрөргә теләүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Бер төрлө мәктәп формаһында булып та, ҡыйбатлы кәрәҙле телефондар, "фирменный" рюкзак һәм сумкалар, өҫ кейеме һәм башҡа төрлө әйберҙәр социаль тигеҙлеккә ынтылыуҙы юҡҡа сығара, тигәндәр менән ысынлап та ризалашырға тура килә. Мәктәп формаһы сығымдарҙы кәметә, тиеүселәргә ҡаршы яуап итеп балаларҙың тиҙ үҫеүен һәм ҡайһы саҡта бер уҡыу йылында ике тапҡыр форма алырға кәрәклеген аргумент итеп килтерә ата-әсәләр. Был фекер менән дә килешмәйенсә булмай.



Шулай уҡ ҡайһы бер мәктәптәрҙә ҡуҙәтелгәнсә, форманы мотлаҡ бер урындан ғына һатып алыуҙы йәки заказ буйынса тектереүҙе талап итеү күптәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Әгәр ҙә берҙәм мәктәп формаһы кейеү тураһында килешелгән икән, формаларҙың төрлөһө бөтә магазинда ла ирекле һатыуҙа булырға һәм ата-әсәләрҙең һайлап алыу мөмкинлеге булырға тейеш икәнлеге күҙ уңынан ысҡындырыла.

Законға ярашлы, мәктәп формаһы эшлекле һәм донъяуи (светский) булырға тейеш. Эшлекле форма балаға уҡыуға көйләнергә ярҙам итһә, уның донъяуи булыуы белем биреү процесының диндән ситтә тороуын аңғарта. Шул уҡ ваҡытта мәктәп формаһы баланың һаулығына зыян килтермәҫкә, бөтә санитар нормаларға тура килергә тейеш. Шуға күрә мәктәп формаһы һатып алғанда уның СанПиН нормаларына тура килеүе тураһында сертификат һорау артыҡ булмаҫ.

Берҙәм мәктәп формаһы һәр бер мәктәп усағында төрлөсә. Уның ниндәй булыуын уҡыусылар, ата-әсәләр һәм мәктәп администрацияһы берҙәм хәл итергә һәм ҡарар локаль норматив актта теркәлергә тейеш һәм, ғәҙеттә, ул тәҡдим итеү рәүешендә генә була. Шул уҡ ваҡытта закон-да берҙәм мәктәп формаһын кеймәгән өсөн ниндәйҙер яза биреү һәм яуапҡа тарттырыу тураһында бер нәмә лә әйтелмәгән. Тимәк, бер кем дә мәктәпкә формала түгел, ә башҡа кейемдә килгән уҡыусыны дәрестән ҡыуып сығарырға, мәктәпкә индермәҫкә, ҡайтып форма кейеп килергә талап итергә тейеш түгел. Хатта ки бындай талаптар уҡыусының хоҡуҡын боҙоу, тип ҡараласаҡ. Мәктәп администрацияһының, уҡытыусыларҙың берҙәм мәктәп формаһы кейергә теләмәгән балаға һәм уның ата-әсәһенә йоғонто яһау юлдары - ҡабул ителгән тәртипте боҙмауға, аңлылыҡҡа саҡырыуға ғына ҡайтып ҡала. Ә бына ҡурҡытыу, янау һәм башҡа төрлө баҫым яһау бөтөнләй булмаҫҡа тейеш. Шулай ҙа мәктәпкә йыртыҡ джинсы салбарҙа, майка һәм кроссовкала йөрөү урынһыҙ икәнен дә белеү кәрәк, сөнки мәктәп мин-минлелекте алға ҡуйыу урыны түгел.

Шәхсән үҙем балаларҙың мәктәпкә берҙәм формала йөрөүенә ыңғай ҡараштамын. Шулай ҙа аҙнаһын бер көнөндә ирекле кейемдә килеүҙе рөхсәт итеү ҙә урынлы булыр ине. Тағы ла республика мәктәптәрендә, балалар ниндәй формала булыуҙарына ҡарамайынса, дөйөм милли һыҙат индереү ҙә ҡамасау итмәҫ, тип уйлайым, сөнки был бөтә Башҡортостан уҡыусыларын берләштереүсе символ булараҡ ҡабул ителер ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниндәй генә бәхәстәр ҡоролмаһын, дөйөм мәктәп формаһын яҡлап йәки уны кире ҡағып әллә күпме дәлилдәр килтерелмәһен, һәр ата-әсә өсөн тәү сиратта баланың сифатлы, уңайлы һәм ыҡсым кейемдә булыуы мөһим. Шуға күрә, кейем етештереүселәр ошоно күҙ уңында тотоп, барыһының да күңеленә хуш килгән мәктәп формаһы текһен, ә балалар уны кейеп, ҡыуанып, мәктәпкә барһын, тип теләйек.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# ЯҠТЫКҮЛМЕ, ӘЛЛӘ БУҠТЫКҮЛМЕ?

**Силәбе өлкәһенең Ҡыштым ҡала округы биләмәһендә Буҡтыкүл (урыҫса - Островко) тип аталған күл урынлашҡан. Силәбе өлкәһенең топонимикаһын, башҡорт халҡының фольклорын өйрәнгән географ, топонимист Шувалов Николай Иванович былай тип яҙа: "Буктыкуль, озеро, территория города Кыштыма. В переводе с башкирского "навозное озеро", где букты - "навозный", куль - "озеро".**

Был күлде нимә иҫкә төшөрҙөммө? Ҡасандыр республикала иң таҙа күлдәрҙән һаналған һыу яҡтылығының тирә-яғын үҙ күҙем менән күргәс: "Их, Яҡтыкүл түгел, уға ла ана шул Силәбе өлкәһендәге, борон әсе телләнеп бирелгән күл атамаһы таман булып бара түгелме?"- тигән уй мейемдә телеп үтте.

Күлдең ярҙарына уҡ терәп таш йорттар һалынған, санитария зонаһы тураһындағы законды белгән кеше юҡмы икән әллә? Күп ҡатлы йорттар арта бара, яңылары тәҙелә. Ә канализация һыуҙарын таҙартыу ҡоролмалары бармы икән? 9 августа һыу бик шикле йөшкелт төҫтә һәм бысраҡ ине, һыу өҫтөн ылымыҡ киҫәктәре баҫҡайны. Ярҙарының буйынан-буйына машиналар килеп тула, ҡайҙа ҡарама - ҡыҙынып яталар, һыу инәләр. Тик бәҙрәф-фәлән күрермен тимә... Һыу төбө ҡайһы бер көндәрҙә яҡшы күренә - уны ылымыҡ, сүп-сар баҫып бара... Элгәре шифахананың һул яғында тулып аҡҡоштар оялай ине, ял итеүселәрҙе катер менән йөрөтә башлағас, улар ҙа юҡҡа сыҡты, тиҙәр ауылда йәшәүселәр.

"Экология России" сайтында ла ошо үҙемдең борсолоуҙарыма ауаздаш юлдар таптым. Бына ниҙәр яҙыла унда: "Башҡортостан халҡын үҙенсәлекле Яҡтыкүлдең бысраныуы борсолдора. Элек был һыу яҡтылығы Рәсәйҙә иң таҙа һәм тәрәндәрҙән иҫәпләнгән, хәҙер йылдан-йыл һайыға бара һәм канализациянан ағыҙылған һыуҙарҙан бысрана. Активистар был хаҡта социаль селтәрҙәрҙә яҙып сыҡты. Күл тирәләй ял итеү урындары, шифаханалар һәм торлаҡ йорттар бик күп. Әммә тәҙәүселәр таҙартҡыс ҡоролмаларҙың кәрәкле күләмен иҫәпкә алып эшләмәгән. "Алтынай" "Межгорье", "Горная", "Горный воздух", "Белые росы", "Альпенхольф" күсемһеҙ милек хужалары ширҡәттәренең барыһына бер һурҙырыу станцияһы һәм ағыҙылған һыуҙар күләменә уның көсө етмәй. 2020 йылдың декабренән 2021 йылдың февраленә тиклем был насостың эше бөтөнләй туктатылып торҙо, ул ремонтҡа ябылғайны. Был осорҙа канализация һыуын Яҡтыкүлгә ағыҙҙылар", - тип әйтелгән активистар яҙмаһында. Һурҙырғысты йүнәткәндәр, ләкин мәсәлә барыбер хәл ителмәгән. Закон боҙоу осраҡтары ҡабатланып тора, тип белдерә йәмәғәтселәр.

Башҡортостан Республикаһы Экологтар союзы рәйесе Александр Веселов "Экология России"ға биргән интервьюһында һыу яҡтылығы тирәһендәге ерҙәр курорт зонаһы статусында булһа, күл үҙе төбәк әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыһы иҫәпләнә, ти. Белгес һыу яҡтылығына нимә булыуын аңлатып, былай ти: "Күл, беҙҙең төбәктәге башҡа һыу сығанаҡтары кеүек үк, һайыға, сөнки бик эҫе, яуым-төшөм һирәк. Нығыраҡ йылына, ылымыҡтар күбәйә. Бысраныу йәһәтенән дә проблема бар, таҙартҡыстар эшләй, хатта икенсе сираттағыһын да төҙөй башланылар. Унда бер нисә ауыл урынлашҡан, ә бөтә ял итеү урындары һәм йорттар канализацияға тоташмаған. Ситкә сығаралар, әммә өлгөрәләрме - быныһы һорау. Мин быйтыр күлдә булдым, таҙартыу ҡоролмаларының улаҡтарын ҡараным, еҫләнеп ятмай ине. Әммә урындағы активистар ваҡыты-ваҡыты менән ең сыға, тиҙәр".

Ваҡыты-ваҡыты менән таҙартыу ҡоролмаларының бысраҡ һыу күләмен эшкәртергә көсө етмәй, һурҙырғыстар ватыла, ә фекалийҙар күлгә төшә. "Күл тымыҡ, унда һыу алышынмай. Һыу төбө ултырмалары барлыҡҡа килә, бысраҡ ағыҙылған урында һыу инергә ярамай, күл яйлап бысрана. Кеше эшмәкәрлегенә бәйле ауырлыҡтар арта", - тип тә өҫтәй эколог.

Бына шундай хәлдәр Яҡтыкүлдә. Хәйер, бер Яҡтыкүлдә генәме икән? Ял итеүселәрҙең тәртипһеҙлеге, ошо тәртипһеҙлектәрҙе күреп тә өндәшмәүселәрҙең битарафлығы ҡайҙа алып бара беҙҙе?..

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор республиканың алкоголь менән ағыуланыу кимәле юғары булған райондарын иғлан итте. Октябрьский (5,1 тапҡырға), Стәрлетамаҡ (4,4), Дүртөйлө (2,7-2,8), Туймазы (1,2-1,4) ҡалаларында, шулай уҡ Бағалы, Дүртөйлө һәм Стәрлетамаҡ райондарында күрһәткестәр республиканыҡына ҡарағанда юғары. 2022 йылдың ғинуар-июль айҙарында Башҡортостанда 83 кеше хәмерҙән ағыуланып үлгән, уларҙың 23-ө - Өфөлә, бишәүһе - Нефтекамала, Бағалы һәм Өфө райондарында, икәүһе - Белоретта һәм Стәрлетамаҡта. Үлем күрһәткесе 2021 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда кәмегән - 100 мең кешегә 2,1, унан алда 2,5 булған.

✓Башҡортостанда "Геройҙар ярышы" даими сараға әүерелә, тип белдерҙе Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә. Билдәләнеүенсә, 24 сентябрҙә "Патриот" паркында Рәсәй чемпионатын үткәреү планлаштырыла, 23 һәм 25 сентябрҙә "Геройҙар ярышы"нда юғары уҡыу йорттары студенттары һәм колледж уҡыусылары ҡатнашасаҡ.

✓Башҡортостанда иген һәм ҡуҙаҡлы культураларҙың тулайым йыйымы әлеге мәлдә 1,3 миллион тоннанан ашып киткән, тип хәбәр итте республика вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Әлегә бөртөклө һәм ҡуҙаҡлы культуралар майҙандарының 27 процентҡа ашыуы, йәғни 478 мең гектары сабылған, 436 мең гектарҙан ашыуы һуғылған. Һәр гектарҙан уртаса уңыш - 31 центнер. Бөртөклө һәм ҡуҙаҡлы культураларҙы һуғыу буйынса алдынғылар - Стәрлетамаҡ, Илеш, Ауырғазы, Ҡырмыҫҡалы, Бүздәк һәм Саҡмағош райондары.

✓Бөрө ҡала советы һуңғы дүрт йылда Бөрө ҡалаһының Төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе булып эшләгән һәм ҡала хакимиәтенең элекке башлығы Николай Баранов эштән бушатылғандан һуң мэр вазифаһын башҡарған Виктория Бурдинаны контракт буйынса Бөрө хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләне. 9 августан Виктория Бурдина үҙ вазифаһында эш башланы.

✓8-10 сентябрҙә Өфөлә үтергә тейешле "Апимир" халыҡ-ара умартасылыҡ форумы күсерелде. Хәҙер сараны 2023 йылдың 7-10 сентябрендә үткәреү планлаштырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда "Апимир" сәйәси сәбәптәргә бәйле бөтөрөлгән "Апимондия" халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһының 47-се конгресына алмашҡа килде.

ҠЫҪҠАСА

# РӘШИТ НАЗАРОВ ИСЕМЕНДӘГЕ...

**Ауырғазы районы Талбазы башҡорт гимназияһына шағир һәм прозаик Рәшит Назаровтың иseме бирелде.** Ауырғазылар талантлы яҡташтарының исемен мәңгеләштереү башланғысы менән сығыш яһаған. Дәүләт Йыйылышы депутаты Рөстәм Ишмөхәмәтов Башҡортостан Хөкүмәтенә халыҡ исеменән шундай мөрәжәғәт индерҙе. Бөгөн халыҡ һайлаһысыһы социаль селтәрҙә ҡыуанысли яңылығы менән уртаҡлашты. "Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы республика үҫешенә тос өлөш индергән күренекле эшмәкәрҙәрҙе хөрмәтләү һәм уларҙың хәтерен мәңгеләштереү мәсьәләләре буйынса комиссия ыңғай ҡарар ҡабул итте. Ошо мәсьәлә ыңғай хәл ителһен өсөн яныл-көйгәндәрҙең барыһын да ихлас ҡотлайым! Ғәҙел һәм мөһим ҡарар. Айырыуса Мәҙәни мираҫ йылында", - тип яҙҙы Рөстәм Ишмөхәмәтов.

✓ **Ер һөрөү буйынса Рәсәйҙең 9-сы асыҡ чемпионаты еңеүсеһе һәм призерҙарының исемдәре билдәле булды.** Ярышта Ленинград өлкәһе механизаторы Александр Дерюгин еңеү яуланы, ә икенсе урынды Мәләүез районынан Илдар Ишекәев алды. Илдар Ишекәев - тәжрибәле оҫта, ярыштарҙа беренсе чемпионаттан уҡ ҡатнаша, күп тапҡыр еңеүгә яҡын булды. 8 августан 14-нә тиклем Ленинград өлкәһендә үткән чемпионатта Рәсәйҙең 40-тан ашыу төбәгенән һәм сит илдәрҙән командалар ҡатнашты. Күргәҙмә барышында "Башҡорт тирмәһе" рәүешендә Башҡортостан экспозицияһы тәҡдим ителде. Күргәҙмә ҡунаҡтарын республиканың агросәнәғәт комплексы потенциалы менән таныштырҙылар, алдынғы фермер хужалыҡтары һәм ҡулланыусылар кооперативтары хаҡында һөйләнеләр, Башҡортостанда етештерелгән деликатестар һәм аҙыҡ-түлек тәҡдим иттеләр.

✓ **Башҡортостанда ишле һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр өсөн яңы ярҙам сараһы индерелде, тип хәбәр итте республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.** "Быйыл йәйҙән йорт һатып алыу йәки төҙөү өсөн бирелгән сертификатты ипотека буйынса беренсе игәнә итеп түләргә мөмкин. Шулай уҡ уны төп бурысты йәки проценттарҙы ҡаплау өсөн файҙаланырға була", - тине Назаров. Бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләүҙең ваҡыты мөҙҙәтһеҙ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быға тиклем ишле һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр өй һалыу өсөн бушлай ер участкаһына ғына дәғүә итә ала ине. Республикала йәшәүселәрҙең үтенесе буйынса был сара киңәйтелде. Ергә мохтаж булмағандар, ләкин үҙҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртырға теләгәндәр 250 мең һум аҡса алырға мөмкин. Бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләүҙе алыу өсөн ғариза менән муниципалитетҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. "Хәҙер хеҙмәттә электрон тәрҙә алыу мөмкинлеген дә өйрәнәбеҙ", - тип йомғаҡ яһаны Андрей Назаров.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ТӘРБИӘЛӘГЕҘ!




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Глобаль (геосәйәси) саҡырыуҙар шарттарында берҙәм мәғариф киңлеге" республика педагогтарының август кәңәшмәһенең пленар ултырышында ҡатнашты һәм мәғариф системаһы хеҙмәткәрҙәренә Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы, педагогтар араһында төбәк-ара һәм республика конкурстары еңеүселәрен, лауреаттарын бүләкләне, уҡытыусыларға уңышлы уҡыу йылы һәм яңы ҡаҙаныштар теләне.**

- Быйылғы беренсе сентябрь элеккеләренән айырыла, беҙ икенсе ысынбарлыҡта йәшәйбеҙ, - тине Радий Фәрит улы үҙенең сығышында. - Бөгөн илебеҙ ҡот осҡос санкциялар баҫымы аҫтында. Башҡортостан хәрбиҙәренең махсус хәрби операция барышында нисек лайыҡлы эш итеүен, Донбасты, Ватаныбыҙҙы ҡыйыу рәүештә яҡлауын беләһегеҙ. Ә бит улар - һеҙҙең уҡыусыларығыҙ. Бөгөн мәктәптең төп бурыстарының береһе - илһөйәрлек тәрбиәһе биреү. Беҙ мәғариф системаһын әхлаҡи һәм кешелек ҡиммәттәренә таянып төҙөй алабыҙ. Беләһегеҙ, илһөйәр егеттәребеҙ араһында хәрби бурысын аҙағынаса үтәп, ҡулдарына ҡорал тотоп һәләк булыусылар бар. Прапорщик Тамерлан Илһамовҡа һәм өлкән лейтенант Максим Серафимовҡа үлгәндән һуң Рәсәй Федерацияһы Геройы тигән юғары исем бирелде, күп яугирҙарыбыҙ Батырлыҡ ордены менән бүләкләнде. Әле Петровское ҡалаһының Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шаймуратов исемен йөрөткән 22-се мәктәбен тергеҙеү менән шөғөлләнәбеҙ. Беҙҙең белгестәр уҡыу йылы хәҙер инде Рәсәй мәғариф стандарттары буйынса яңыртылған һәм йыһазландырылған кабинеттарҙа башланһын өсөн эштәрҙе ваҡытында тамамларға тырыша...

Республика педагогтарының август кәңәшмәһендә ҡатнашыусыларға Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов онлайн бәйләнеш аша сығып, 27 июндә Рәсәй Президенты Владимир Путин 2023 йылды Уҡытыусы һәм остаз йылы тип иғлан итеү тураһында указға ҡул ҡуйыуы тураһында хәбәр итте. "Уҡытыусы һәм остаз йылында һеҙҙең өсөн ниндәй саралар мөһим булыр ине, мәғариф системаһының артабанғы үҫешен нисек күрәһегеҙ - шул хаҡта һөйләгеҙ. Тәҡдимдәрҙе беҙгә электрон почта аша ебәрергә мөмкин", - тине Сергей Кравцов. Ул шулай уҡ яңы уҡыу йылынан ғаилә, төбәк һәм ил тарихын беренсе класта уҡ өйрәнә башларға тәҡдим итте. Федераль министр һүҙҙәренсә, 5 сентябрҙән илдең барлыҡ мәктәптәрендә "Иң мөһиме тураһында һөйләшеү" - яңы форматтағы класс сәғәте уҙғарыла, унда уҡыусылар класс етәксеһе менән граждандыҡ тәрбиәһе, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, тарихи аң-белем таратыу, әхлаҡ һәм башҡа темаларға әңгәмә ҡорорға мөмкин. Унынсы һәм ун беренсе класс уҡыусылары 1 сентябрҙән тағы бер яңылыҡ көтә: "Рәсәй донъяла" уҡыу курсында "Рәсәй - минең тарихым" тигән яңы блок барлыҡҡа килә. Сергей Кравцов уҡытыусыларға яңы уҡыу йылында уңыштар, ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс эш, сағыу идеялар теләне.

# МӨҺИМ ФОРУМДА...




**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан делегацияһының "Армия-2022" хәрби-техник форумында ҡатнашыуы хаҡында һөйләне.**

Радий Фәрит улы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә һуңғы бер нисә йылда республиканың тотороҡло рәүештә илдең оборона комплексын продукция менән тәьмин итеүселәр иҫәбенә инеүен, ә ошо көндәрҙә Мәскәү өлкәһендә үткән "Армия-2022" хәрби-техник форумында республиканың "Берләшкән двигателдәр эшләү корпорацияһы - Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе", "Күмертау авиация етештереү предприятиеһы", "Витязь", "Полигон", "МЕГИ" компаниялары ҡатнашыуын билдәләне. "Беҙ стратегик предприятиеларға ныҡ ярҙам итәбеҙ, уларҙың күбеһе менән импортты алмаштырыу, етештереүҙе диверсификациялау, заказдар портфелен арттырыу йәһәтенән эшләйбеҙ. Һөҙөмтәлә яңы эш урындары булдырыла, башҡа етештереүселәр менән кооперация бәйләнешә үҫешә, сәнәғәттең конкуренцияға һәләтлелеге арта. Был эште беҙ мотлаҡ дауам итербеҙ. "Армия-2022" форумында Европа, Азия, Африка һәм Латин Америкаһы илдәренән эксперттарҙың ҡатнашыуы бик мөһим. Был Рәсәйҙең, ҡайһы бер дәүләттәрҙең санкциялар индереүенә ҡарамаҫтан, донъяла үҙенең әһәмиәтен һаҡлап ҡалыуын йәнә бер тапҡыр иҫбатлай. Беҙҙең сәйәсәтте күптәр уртаҡлаша", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, "Армия-2022" форумында 72 сит ил дәүләттәре, 1.5 мең предприятие һәм ойошма вәкилдәре ҡатнаша.

# ЯЛ ИТКӘН ӨСӨН...



**Рәсәйҙә ял иткән өсөн 20 процент кешбэк программаһы буйынса юллама һатыуҙың яңы этабы 25 августа башлана. Был хаҡта ил Премьер-министры Михаил Мишустиндың белдереүенә һылтанма менән "Интерфакс" хәбәр итте.**

Михаил Мишустин һүҙҙәренсә, кешбэк 2022 йылдың 1 октябренән 25 декабренә тиклем сәйәхәткә сығыуға ҡағыла. Программала Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәре ҡатнаша. Бөтәһе 600 мең самаһы кеше әлеге мөмкинлектән файҙаланыр тип көтөлә. Круиздарға кешбэк 1 сентябрҙән башлана һәм навигация тамамланғансы дауам итә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан туристик кешбэк программаһы сиктәрендә һатыу буйынса Волга буйы федераль округында алдынғы урынды биләй. Бынан алда республика етәксеһе Радий Хәбиров республиканы туристик үҙәккә әүерелдереү бурысын ҡуйғайны. Әйтәйек, тиҙҙән хаҡы 200 миллион һумлыҡ 5 отелдән торған ҡунаҡхана селтәре төҙәлә. Радий Хәбиров әйтеүенсә, Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында "Туризм.РФ" корпорацияһының генераль директоры Сергей Суханов менән республикала сит ил ҡунаҡтары өсөн туризмды үҫтереү буйынса хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу ошо йүнәлештә икенсе аҙым булып тора. Бынан тыш, Башҡортостандың туристик индустрия күләмен йыл да 25 миллиард һумға тиклем арттырыу күҙаллана. Тармаҡты үҫтереү стратегияһы 2035 йылға тиклем раҫланған.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Йәй дауамында М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында дүрт сменала лагерь эшләне. Унда Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларынан Башҡортостанға килгән 160-ҡа яҡын уҡыусы ял итте. Улар Башҡортостандың мәҙәниәте һәм традициялары менән таныштылар, Ҡырмыҫҡалы районының Шаймурат ауылына (элекке исеме Биштәкә) барып, Миңлеғәли Шаймуратов һәйкәленә һәм бюсына сәскәләр һалды. Батырҙың хәҙерге Луганск Халыҡ Республикаһы биләмәһендә һәләк булыуы балаларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

✓Башҡортостан көрәшселәре грэпплинг буйынса Рәсәй беренселегендә биш миҙал яуланы, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Йәш спортсылар "Но Ги" бүлегендә ике көмөш һәм өс бронза наградаға лайыҡ булды. 12-13 йәшлектәр араһында Ислам Нуриздинов - икенсе, Роберт Сабиров өсөнсө урынды алды. 14-15 йәшлек спортсылар Аделина Зәйнуллина - "көмөш", Даниил Матвеев һәм Вячеслав Белобородов "бронза" яуланы. Спортсылар менән Ислам Иҙрисов шөғөлләнә.

✓Владивостокта VII "Азия балалары" халыҡ-ара спорт уйындары уҙҙы. Унда Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренән һәм Рәсәй төбәктәренән 13-16 йәшлек 1300-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Башҡортостандың йәш спортсылары VII "Азия балалары" спорт уйындарында өс көмөш һәм ике бронза миҙал яуланы. Көмөш миҙалға дзюдосы София Белаш, мас-рестлер Кирилл Селкунов һәм боксер Тимур Шәйбәков лайыҡ булды. Бадминтонсылар Фәрхәт Шәрипов һәм Иван Меркушев Башҡортостандың йыйылма командаһына бронза наградалар килтерҙе.

✓"Патриот" хәрби-патриотик паркында урынлашҡан "Авангард" уҡытыу-методика үҙәгенә Рәсәй Геройы, өлкән лейтенант, яугир-десантсы Максим Серафимовтың исеме бирелә. Махсус тәғәйенләнеш төркөмө командиры, өлкән лейтенант Максим Серафимов 27 февралдә разведка отряды составында дошмандың көслө уты аҫтына эләккән. Ул ҡыйыу һәм тәүәккәл эш итеп, 30 дошманды һәм бер бронетранспортерҙы юҡ иткән. Сираттағы һөжүм ваҡытында офицерҙан ике метр алыҫлыҡта граната шартлаған. Өлкән лейтенант үҙенең кәүҙәһе менән гранатаны ҡаплаған һәм иптәштәрен үлемдән ҡотҡарған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Хәрби ведомствоның рәсми сайтында "Бөйөк Һуғыштың тәүге көндәре геройҙары" тигән яңы бүлек барлыҡҡа килде. Унда Һуғыштың беренсе көндәрендәге ваҡиғалар тураһында архив материалдары күрергә мөмкин.*



ҺОРАУ - ЯУАП

**Буласаҡ пенсионерҙарға юристар нисек ярҙам итә ала? Беҙҙә, ғәҙәттә, пенсия хаҡында уйланмауың хәйерлерәк: был үтә күңелһеҙ тема һәм был хаҡта һүҙ алып барыу ҙа файҙаһыҙ тип иҫәпләнә. Беҙгә пенсияға тиклем әле бик алыҫ, ул ҡайҙалыр "тауҙар артында" булып тойола, шуға ла, уға тиклем әллә йәшәйем, әллә юҡ, тип ҡул ғына һелтәй йөштәр. Ләкин ул килә лә етә. Бына шул саҡта башлана ла инде көтөлмәгән проблемалар. Шундайыраҡ һорауҙарҙың ҡайһы берҙәренә адвокат Александра ЛУКИНА яуап бирә.**

# ПЕНСИЯ ЙӘШЕ...

## тауҙар артында түгел




➔ **Буласаҡ пенсионерҙар күберәк ниндәй мәсьәләләр менән мөрәжәғәт итә?**

- Пенсия тураһында закон ғәйәт ҡатмарлы, ул 1996 йылғы законға нигеҙләнә һәм даими үҙгәреп тора. Әйткәндәй, 2023 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәй Пенсия фонды менән Социаль страховка фондын РФ Социаль фондына берләштереү кеүек ҙур яңылыҡ көтөлә. Закондар ҡатмарлы, тигәйнем инде, шуға ла кешеләр йыш ҡына аңлашылмаған һорауҙар менән мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, нимә ул индивидуаль пенсия коэффициенты (ИПК) һәм ул нисек иҫәпләнә тип һорайҙар. Былдай мәсьәләләр консультация сиктәрендә хәл ителһә, судка инде күберәк эш буйынса документтар юғалған һәм юллаған осраҡтарҙа хеҙмәт стажын тергеҙеү маҡсатында киләләр. Минең эш тәжрибәмдә шундай бер осраҡ та булғайны: эш биреүсе Пенсия фондына взностарҙы күсереп бармағанлыҡтан, был осорҙо буласаҡ пенсионерҙың эш стажына индереүҙән баш тартҡандар.

➔ **Ә бына пенсия күләме буйынса бәхәстәр буламы?**

- Ғөмүмән, пенсия күләме буйынса көтөлмәгән осраҡтар булырға тейеш түгел, сөнки Пенсия фонды граждандарға өс йылға бер: ирҙәргә - 40, ҡатындарға 45 йәштән алып мәғлүмәт биреп килә. Был мәғлүмәттәр менән Дәүләт хеҙмәте порталында йәки йәшәгән урын буйынса Пенсия фонды бүлексәһендә лә танышырға мөмкин. Белешмәлә һеҙҙең стаж, пенсия коэффициенты, шул осорға ҡарата страховкалы пенсия күләме хаҡында мәғлүмәттәр була. Кем социаль пенсия аласаҡ, уның күләме алдан билдәле. Буласаҡ пенсия күләменә ниндәйҙер йоғонтоһо булған хәлдәр хаҡында кеше хәбәрҙар булырға тейеш, тип уйлайым. Мәҫәлән, хәрби хеҙмәттә булған осор стажға индерелә. Шулай уҡ 80 йәштән оло туғандарын ҡараған йылдар ҙа стажға иҫәпләнә. Ләкин пенсия күләмен кәметеүгә илтеүсе осраҡтар ҙа бар. Был иһә кешенең енәйәт закондарын боҙоуына бәйле. Шулай уҡ буласаҡ пенсионерҙың эшләмәгән һәм шунлыҡтан пенсия взносы күсерелмәгән осор ҙа, сит илдә эшләп, Рәсәй Пенсия фондына аҡса күсерелмәгән йә булмаһа эшкә рәсми рәүештә урынлашмағанлыҡтан, эш хаҡын конвертта алып, пенсия взносы әҙ күренгән осраҡтар ҙа пенсияны кәметә. Эшкә рәсми рәүештә урынлашмағас, стаж да артмаясаҡ, взнос та тупланмай, шуға күрә ундай кешеләр ҡартлыгын матди тәьмин итеүҙең башҡа төр варианттары хаҡында уйланырға тейештәр.

➔ **Бала ҡарап ултырған йылдар стажға инәме?**

- Тәүге 1,5 йылы инә. Әгәр ҙә рөхсәт ителгән өс йыл тулы килеш файҙаланылһа, уның икенсе яртыһы стажға иҫәпләнмәй. Һәм, ғөмүмән, бала ҡараған осорҙарҙың хеҙмәт стажына 6 йылдан да күберәге индерелмәй.

➔ **Йәғни, мәҫәлән, дүрт бала менән декретта ултырыуҙан эш стажына тап әлеге 6 йыл өҫтәлә икән, бишенсе баланы ҡараған йылдар стажға иҫәпләнмәй, тимәк?**

- Бында шунһыһы ла бар: стаж әсәгә генә түгел, атай кешегә лә яҙыла ала. Тик улар бер үк балаға һәм икеһе бер юлы декрет алырға тейеш түгелдәр.

➔ **Ә эшләп йөрөүсе пенсионерҙар менән хәлдәр нисек тора?**

- Уларға социаль пенсия күләмендә (республикала, мәҫәлән, эшләп йөрөүсе пенсионерҙар өсөн минималь социаль пенсия 5 мең самаһы) төбәк өҫтәмә коэффициенты менән аҡса түләнә. Эшләүсе пенсионер взнос түләүен дауам итә. Уның стажы арта бара, ләкин пенсияһы индексацияланмай.

➔ **Тимәк, эшләүсе пенсионерҙарға түләү пенсионер өсөн минималь эш хаҡы күләменән дә кәмерәк килеп сыға?**

- Улар бит эш хаҡы ала. Ғөмүмән, үҙеңдең буласаҡ пенсияң менән әүҙем ҡыҙыҡһыныу кәрәк, үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙар биреүҙән тартынырға ярамай. Ғүмерҙең был осоро хаҡында алдан уйлау хәйерле. Бөтөн булған мәсьәләләр менән Рәсәй Пенсия фондына, кәрәк икән, юристарға кәңәш һорап мөрәжәғәт итергә мөмкин.

**"БАШИНФОРМ".**

ҠЫҪҠАСА

# ТҮЛӘҮҘӘРҘЕ...

**Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән "Мир" картаһына күсерелгән социаль түләүҙәр исемлеге киңәйтелде.** Һүҙ "Дәүләт социаль ярҙамы тураһында"ғы Федераль закон менән билдәләнгән аҙ тәьмин ителгән граждандарға айлыҡ түләүҙәр һәм пособиелар, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре өсөн түләүгә субсидиялар тураһында бара. Шулай уҡ милли түләү системаһы карталары ярҙамында торлаҡ һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәре өсөн түләүгә киткән сығымдарға компенсация алырға мөмкин. Был льготалар ауыл ерендә эшләгән уҡытыусыларға, хеҙмәт осоронда һәләк булған хәрбиҙең йәки Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәренең ғаилә ағзаларына һәм граждандарҙың башҡа категорияларына ҡаралған. Бынан тыш, "Почетлы донор" билдәһе менән бүләкләнгәндәргә аҡса "Мир" карталарына күсерелә. Быға тиклем "Мир" аша пенсия, хеҙмәт хаҡы, эшһеҙҙәр өсөн пособие, беренсе һәм икенсе бала тыуыуға бәйле түләүҙәр алырға мөмкин ине. Бынан тыш, улар коммуналь хеҙмәттәргә түләгән өсөн кешбэк алырға ла мөмкинлек бирә.

✓ **Рәсәй почтаһы Башҡортостан халҡы араһында популяр булған өс социаль түләүҙе атаны.** Йыл башынан республикала йәшәүселәр почта бүлексәләрендә яҡынса 3,4 миллион төрлө социаль түләүҙәр алған. "Почтала алынған һәр икенсе социаль түләү - пенсия. Республикала Рәсәй почтаһы аша пенсия алған халыҡтың 97 проценты быны өйҙә эшләүгә өҫтөнлөк бирә", - тип хәбәр итте Башҡортостан Федераль почта элемтәһе идаралығының матбуғат секретары Борис Слуцкий. Шартлы икенсе урында - инвалидтарға аҡсалата түләү. Быйыл алты айҙа почта бүлексәләре хеҙмәткәрҙәре уларға 850 меңдән ашыу суммала аҡса тараткан. Рейтингтың өсөнсө баҫҡысында - эшкә һәләтһеҙ кешеләрҙе ҡарағандарға компенсация. Был аҡсаны 650 меңдән ашыу кеше алған. Республикала йәшәүселәр почта бүлексәләрендә бөтәһе 70-тән ашыу төр социаль түләү (16 йәшкәсә балаларға, страховка аҡсаһы, хеҙмәт ветерандарына, тыл хеҙмәтсәндәренә, инвалидтарға өҫтәмә түләү һәм башҡалар) ала.

✓ **Хәрби ведомствоның рәсми сайтында "Бөйөк Һуғыштың тәүге көндәре геройҙары" тигән яңы бүлек барлыҡҡа килде.** Унда Һуғыштың беренсе көндәрендәге фажиғәле һәм шул уҡ ваҡытта героик ваҡиғалары тураһында бәйән иткән, СССР халыҡтарын талау һәм баҫып алыу буйынса немец-фашист командованиеһының пландарын сағылдырған тиҫтәләрсә архив материалдары күрергә мөмкин. Хәрби штаб начальниктарының докладтары, немец ғәскәрҙәренең урынлашҡан урындарҙың карталары һәм башҡа мәғлүмәттәр бар. Документтарҙы Рәсәй Оборона министрлығының Үҙәк архивы һәм Ватанды һаҡлағанда һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү идаралығы тапшырған, тип билдәләнеләр Рәсәй Оборона министрлығының мәғлүмәт һәм киң коммуникациялар департаментында.

✓ **2025 йылда Рәсәйҙә бер тапҡыр ҡулланылған пластик изделиеларҙан этаплы рәүештә баш тартыу планлаштырыла.** Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте вице-премьеры Виктория Абрамченко эш нисек ойошторолаcағы тураһында һөйләне. Уның әйтеүенсә, закон проекты әле Хөкүмәт майҙансығында. Башҡарма властың федераль органдарына ебәрелгән эшләнеп бөткән вариантында Рәсәй Федерацияһына ҡарата санкциялар индерелгәнгә тиклем расланған концепциянан саҡ ҡына айырыла. "Яуаплылыҡты тауар етештереүселәрҙән төрөү әйберҙәрен етештереүселәргә һалырға ҡарар ителде. Тауар етештереүселәр һаны 4 миллион тирәһе, ә төрөү материалын етештереүселәр 4 меңгә яҡын", - тип аңлатты Абрамченко. Бер тапҡыр ҡулланылған төрөү материалдары йәки яңынан эшкәртелмәгән тауарҙар айырым график буйынса бөтөрөләсәк.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Үт ҡыуығы

❖ Үт ҡыуығындағы таштарҙы бөтөрөү өсөн 0,7 литр тирәһе ҡайнар һыуға 2 ҡалаҡ күгүлән (спорыш) һалып, талғын утта 5-7 минут ҡайнатырға һәм 20 минут төнәтергә. Шунан һөҙөп алып һыуытырға һәм көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 20-30 минут алда, сирек стакан эсергә. Хәл яҡшырғас та көнөнә бер тапҡыр булһа ла сирек стакан төнәтмә эсеп тороу файҙалы. Күгүләнде ваҡ ҡына алһыу сәскә атҡан мәлендә йыйырға кәрәк.

❖ Үт ҡыуығынан таштарҙы һәм ҡомдо сығарыуҙың бер ысулы: 7,5 алма һуты менән 120 мл зәйтүн майы һатып алырға һәм 3 көн алма диетаһы тотоу. Был организмды таҙартырға ярҙам итә. Башта 1 стакан алма һутын сәғәт иртәнге 8-ҙә эсергә, шунан башҡа бер нәмә ашамаҫҡа. Аҙаҡ ашағы килһә лә ризыҡ ҡапмаҫҡа. Артабан һәр ике сәғәт һайын 2-шәр стакан һут ҡына эсеп торорға, был рәүешле сәғәт киске 8-гә тиклем тукланырға. Көнөнә 3,5 литр килеп сыға. Икенсе тәүлектә лә алма һутын әлегесә эсергә. Был арала оло ярау һһамаһағыҙ, һәр көн һуһында эс йомшартҡыс шифалы үлән төнәтмәһе эсергә була. Мәҫәлән, 1 ҡалаҡ ваҡланған укроп орлоғон 1,5 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп эсергә мөмкин. Йәки 2 ҡалаҡ атҡолаҡ (конский щавель) тамырына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, боҫҡа тоторға һәм төнгәләккә 1 стакан эсергә. Бик ҡатмарлы осраҡта ғына йылы һыу менән клизма яһарға була. Таҙарыныуҙың өсөнсө көнөндә иртәнге сәғәт 8-ҙә ике стакан алма һуты, ә ярты сәғәттән 120 мл (ярты стакан тирәһе) таҙа зәйтүн майы йоторға. Уның артынса 1 стакан һыу ҡатыштырылған алма һутын эсергә. Шунан эҫе ваннаға инергә (һабынланмаған), хәлгә һәм тойомлауҙарға ҡарап, 20-30 минут ятырға. Ныҡ итеп йылынырға һәм тирләргә кәрәк. Май эскәндән һуң хәлһеҙлек тойған осраҡта ял итеп алырға кәрәк. Был рәүешле дауаланыуҙың һөҙөмтәһе тиҙ күренә: бәүел менән ҡом, ә оро яраузҙа ваҡ ҡына йәшел йәки ҡара таштар (ҡайсаҡ йәшел шыйыҡса рәүешендә) сыға. Дауаланыу әҙемтәһе ауыртыу-һыҙланыуһыҙ үтә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Көньяҡ-көнсығыш ижауҙары үҙ-ара оҡшаш күренһә лә, һәр оҫтаның ҡулы һиҙелеп торған. Ижау формаһы, тотҡаһының оҙонлоғо, дуңгәләк йәки сығынты-ырғаҡ урынлашҡан урыны буйынса айырмалар булған. Ҡайһы бер ижауҙар бигерәк тә үҙенсәлекле күренгән. 1970 йылда Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылы музейында күргән ижау башҡаларҙан ҡош башы рәүешендә ословнған тотҡалы, кутәренке һәм тура артҡы яғы менән айырылып торған. Тотҡаһы нигеҙенә ҡанаттарҙы хәтерләткән һырҙар һалынған, өҫтөнә өсмөйөш хасил итеп үтә тишектәр тишелгән. Ижау башы йомортҡаға оҡшаш формала булған һәм төбө асыҡ белендереп эшләнмәгән. Был ижау Йылайыр районынан алып килендгән. Унда Һаҡмар һәм Йылайыр араһындағы ауылдарҙа (Һабыр, Йомағужа һ.б. ауылдар) Урал аръяғындағы ижау эшләүҙең иң көньяҡ үҙәге урынлашҡан. Уралтауҙың ҡайын урмандары артабан тамамланған.



*Ҡымыҙ ижауы Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылы (1971 й. экспедиция). Рәссамы В.М. Шутова*

Ә бына Баймаҡ районы Күсәй ауылындағы ижау киреһенсә, ялпаҡ төплө һәм тигеҙ ҡырлы булған (1958 йылғы экспедицияһы). Ситенең артҡы яғы трапеция рәүешендә эшләнгән һәм өҫкә күтәрелеп барып, ҡыҫҡа ғына тотҡа рәүешендә ословнған. Уның башланған урынында баштүбән эшләнгән пирамидаларға оҡшаған бәләкәй фигуралар һырланған. Ситенең артҡы яғындағы топ биҙәк - ҙур ҡуҫҡар. Ул ҡабарып ҡалҡып тора, бындай асыл менән ҡымыҙ тәпәндәре лә биҙәлгән. Ҡуҫҡар аҫтында өс йомро тишек тишелгән.



*Ҡабарынҡы ҡуҫҡар биҙәкле ижау. Баймаҡ районы, 1958 йыл*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ҠАЙТАУАЗ*

# НИМӘ УЛ КЛЕПТОМАНИЯ,

## йәғни Бурҙарҙы аҡлап буламы?

**Гәзитебеҙҙең 28-се һанының "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһында "Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең" тигән башҡорт халыҡ мәҡәле һәм артабан "Шулай итеп, тағы бер аҡыл…" тип башланып киткән бер ҡыҙыҡлы хикәйәт баҫылған. Бер ишан менән хаж сәфәрендә юлдаш булған атаҡлы бурҙың һис кенә лә урламайынса тора алмағанлығы хаҡында ул.**



Был танылған бурҙы яҡшы белгән ишан баштараҡ уны үҙе менән бергә изге сәфәргә алырға риза булмай. Әммә хаж ҡылған мәлдә урламаҫҡа һүҙ бирә был кеше. Тик урламайынса һис кенә лә тыныслыҡ тапмаған, хатта төн йоҡоларын йоҡлай алмай торған был әҙәм, хажға баргас, башҡалар күрмәгәндә уларҙың ниндәй ҙә булһа әйберен алып, икенсеһенең сумаҙаһына күсереп һалып йөрөй башлай... Бер яҡтан уйлап ҡараһаң, ул урланы, әммә шул уҡ ваҡытта, урламаны ла һымаҡ. Инде был ҡылығы өҫтөндә тотолғас, ишандың "Ни эшләйһең һин? Һин бит вәғәҙә бирҙең!" тигән һүҙҙәренә ошолайыраҡ яуап бирә: "Мин биргән вәғәҙәмде үтәйем, бер ни ҙә урламайым. Был әйберҙәр бер ҡайҙа ла юғалмай, улар бер сумаҙандан икенсеһенә генә күсә һәм һәр саҡ табыла... Ләкин ғәҙәтемде ҡайҙа ҡуйыйм?.. Һин бит изге йән. Һин мине лә йәлләргә тейешһең..." Ошо хәлгә ҡарата артабан ишандың фекере һәм уның был әҙәмгә ни әйткәнлеге хаҡында мәғлүмәт килтерелмәй.

Күпселек уҡыусыла был бур кешегә ҡарата насар уй тыуыуына шикләнмәйем. Әлбиттә, ҡараҡты кем йәлләһен! Хөрмәтле гәзит уҡыусылар, бәлки күптәргә ифрат ғәжәп тойолор, әммә мин бына ошо кешене ысын күңелдән йәлләнем, һәм уға ныҡ ҡына ярҙам иткем килде. Ысын! Ни өсөн? Сөнки мин, табип булараҡ, психиатрия өлкәһендәге "клептомания" тип аталған бер сир хаҡында беләм. Медицина теле менән әйткәндә, ул - "болезненная тяга к воровству". Ифрат һирәк осрай торған бындай сирҙән бер кем дә гарантияланмаған. Клептоманик - тыштан ҡарағанда ҡәҙимге кеше. Ниндәйҙер урында эшләп тә йөрөй, ғаиләһе лә була. Кешеләр менән аралашыуға ла ипле. Үҙенең вазифаһы буйынса эшен дә яҡшы алып барыуы мөмкин. Әммә берәй унай шарт тыуғанда, ниҙер булһа ла урлау яғын ҡарай. Байыҡыу ниәте менән йә иһә башҡаларға берәй көнсөллөктән дә түгел, ә "түҙеп торғоһоҙ" урлау теләгәнән. Ғәжәпкә, урлаған нәмәләре лә уға бөтөнләйгә кәрәкмәгән әйберҙәр булып сыға. Ниҙер урлауҙан ул тик ҡәнәғәтлек кенә таба. Кәйефе күтәрелә, эше алға китә. Ә бер аҙ урламай торһа, ысынлап та төндәрен йоҡлай алмай, аппетиты түбәнәйә, хатта депрессияға ла бирелеп китеүе ихтимал. Бындай сирлеләрҙе психиатр мотлаҡ иҫәпкә ҡуя. "Урлау өйәнәге" кәсәйеү сәбәпле, уны әләнән-әле хатта стационарға һалып, дауалап та алалар. Бындай ауырыу кеше әрме хеҙмәтенә лә яраҡһыҙ.

Хәрби табип булып хеҙмәт иткән дәүерҙә (мин үҙем күрмәнем) шундай сир менән ыҙа сиккән бер һалдат хаҡында һөйләгәйнеләр. Тынлаулы, эшкә лә егәрле был һалдат үҙенең хеҙмәттәштәренең теш щеткаһы, паста, һабын, ручка, ҡәләм, ҡырынғыс, энә-еп һымаҡ нәмәләрен һәр саҡ урлай торған булған. Үҙенең матрас аҫтына йә тағы ҡайҙалыр йәшереп йөрөгән. Иптәштәре уны тотоп туҡмаһалар ҙа, барыбер шул эш менән булышыуын дауам иткән. Һәр саҡ урлағыһы килеп тороуы хаҡында үҙе башҡаларға әйтҡәс, командирҙары уны госпиталь психиатрына алып килгән. Күпмелер ваҡыт округ госпиталендә тикшерелеү үткәндән һуң, һалдатҡа әлеге "клептомания" диагнозын ҡуйып, уны "хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ" тип тапҡандар һәм өйөнә ҡайтарып ебәргәндәр.

Башта иҫкә алған хикәйәт тә бушҡа ғына килеп сыҡмаған, тигән инанауҙамын. Унда телгә алынған ишандың аныҡ исеме лә (Әхмәт) килтерелеүенә ҡарағанда, булған хәлдер тип тә уйлайым. Әле асыҡлап бирелгән клептоманияның симптомдарына бигерәк ныҡ оҡшаған бит. Әлбиттә, медицина менән бөтөнләйгә таныш булмаған кешегә бындай сирлене аңлауы ифрат та ауыр. Мәҫәлән, күптәр алкоголизмдан сирле кешене "эскесе", "алкаш" тип атауҙан үтмәй. Хәләл ефете уны "аҡтығыңды эскере..." тип ҡарғауҙан да тартынмай. Ысынлап та, баштараҡ яман ғәҙәт кенә булып башлана шул был ауырыу. Тик теге йәки был кешенең ошо ифрат ауыр сирҙең бер стадияһында икәнлеген белеүселәр бик аҙ. Әгәр ҙә алкоголик үҙенең сирле булыуын үҙе танып, үҙендә ихтыяр көсө табып, йә иһә "эсеп үлеүҙән" ҡурҡып булһа ла хәмерҙән өҙөлөп киткән хәлдә, һауығыуы - һис шикһеҙ. Әммә клептомания сиренең прогнозы (ни менән тамамланыуы) хаҡында һүҙ йөрөтөү ифрат та ауыр. Уны дауалау өсөн гипноз, психотерапия ысулдары ҡулланыу зарур. Бәлки, берәй белгән кеше Ҡөрьән аяттары ярҙамында ла дауалай алалыр. Ул тарафты әллә ни өйрәнмәгәнмен. Бәйғәмбәребеҙҙән с.ғ.с. Аллаһ Тәғәләнең бер сирҙе лә дауаһыҙ барлыҡҡа килтермәгәнлеге хаҡында әйтелгән хәҙисе бар бит.

Хикәйәтсе ана шул кешенең сәйер ҡыланышын уның ғәҙәттәре менән бәйләй һәм ошолайыраҡ фәлсәфәләй: "Һин ғәҙәттәрең менән йәшәйһең, дөрөҫөрәге, ғәҙәттәр һинең менән йәшәй. Ғәҙәттәрҙең үҙ энергияһы бар, шуға ла улар һәр саҡ дауамлы була. Әлбиттә, улар энергияны һинән ала, һин элек тә, хәҙер ҙә улар менән хеҙмәттәшлек итәһең. Тора-бара ғәҙәттәрең һинең хужаға, ә һин уларҙың хеҙмәтсеһенә, бары тик ҡулаһенә әйләнәһең... Бына шулай, һәр кем үҙ ғәҙәттәренең ҡорбаны. Ғәҙәттәрең һәр ваҡыт һинең менән идара итә. Шунан инде һин тотҡон, ҡол тормошо менән йәшәйһең. Төрмә һинең ғәҙәттәреңдән, һин ҡылған ҡылыҡтарҙан хасил була..."

Күреүегеҙсә, хикәйәтсенән айырмалы, мин ишан менән хажға барған әлеге кешенең хәленә башҡасараҡ баһа биреү яғындамын. Был әҙәмдең ҡылығын "насар ғәҙәт" тип әйтергә лә телем бармай. Ул мотлаҡ дауалауға мохтаж. Әгәр шундай кешене сирле тип һанамай, уға фәҡәт закон күҙлегенән генә баҡып хөкөм ҡарары сығарған, хатта уны иркенән мәхрүм иткән хәлдә, төрмәләге ысын бурҙар араһында ул ысынлап та харап буласаҡ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәлки, ошо хикәйәттең төп персонажына "Хаҡ мосолман булараҡ, үҙенең гонаһтарын танып, уларҙы юйыу ниәте менән хаж ҡылырға - Ислам диненең биш терәгенең береһен үтәргә йөрьәт иткән кеше" тип, уға хатта ихтирам йөҙө менән ҡарау ҙа кәрәктер? Әйе, Әхмәт ишандың ахырҙа уға ни әйткәнлеге хикәйәлә асылып бирелмәгән. Ә бәлки, был аҡыл эйәһе лә тап ошолайыраҡ фекер иткәндер?.. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Минең менән риза булмағандарҙың да фекерен тыңларға әҙермен.**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

2

# Мәғариф

20-26 август (урағай) 2022 йыл
№33 (1023)

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

КИЛЕШМӘЙЕМ!

## ДӘРЕСЛЕКТӘР...

### туған телгә хеҙмәт итмәй

**Быйыл сығарылыш уҡыусыларының "Һуңғы ҡыңғырау" тантанаһына барып, яртылаш русса алып барылған сарала сығыш яһаусыларҙың береһененң дә туған башҡорт телебеҙҙе һаҡлау тураһында телгә алмауына, ә уҡыусыларҙың туған телдә вата-емерә һөйләшеүенә шаһит булып, ғәжәп иттем. Һүҙ алып, туған телдә һөйләшеүҙең мөһимлеге тураһында миҫалдар килтереп, телмәр тоттом. Бик дөрөҫ, тип хупланылар, рәхмәт әйттеләр.**

Юл төшкәндә күреп сығайым әле, тип, мәктәп китапханаһына ла инеп сыҡтым. Китапханасы 1-се класс уҡытыусыһы ла икән. Унан башланғыс синыфтарҙың башҡорт теле һәм туған әҙәбиәт буйынса дәреслектәрен һорап алдым. Бәхеткә күрә, 1-2-се класс уҡыусылары өсөн китаптарҙа үҙебеҙҙең яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың хикәйәләре һәм шиғырҙары урын алған алыуға. Әммә 3-сө кластың кластан тыш уҡыу китабы тик немец, инглиз яҙыусыларының әкиәттәренән генә тора икән. Йәнәһе, 3-сө кластан уҡ донъя әҙәбиәте менән таныштыралар. Ни бысағыма кәрәк был, уҡыусылар уның йөкмәткеһен аңламағас? Был әҫәрҙәрҙә тыуған илгә һөйөү, ата-әсәгә ҡарата ихтирам менән ҡарау бармы? Үҙ яҙыусыларыбыҙҙың әкиәттәре менән таныштырһаҡ, яҙыҡ булмаҫ ине лә баһа. Мәҫәлән, Зәйнәб Биишеваның "Ел-ел арбам", Кирәй Мәргән әкиәттәре, "Әминбәк", "Ҡамыр батыр" кеүек халыҡ әкиәттәре үрҙә телгә алынған мөһим төшөнсәләр тураһында бит. 4-се кластың "Рус әҙәбиәте" дәреслегендә Андерсендың "Русалочка" әҫәре бирелгән. Өсөнсө сиректең аҙағында уҡый башлағандар, каникул үткән, дүртенсе сирек башланған, әммә тамамлай алмағандар. Тимәк, әҫәрҙең идея-йөкмәткеһенә лә төшөнөп етә алмаған балалар. "Туған әҙәбиәт" китабында ла шул уҡ сит ил яҙыусыларының әҫәрҙәре тәржемә итеп бирелгән. Исмаһам, рус классик әҙәбиәтен тәшкил иткән әҫәрҙәр индерелһә, күпкә яҡшыраҡ булыр ине. Юғиһә, дәреслеккә бер нисә яҙыусының ғына әҫәрен индергәндәр.

Ошо урында һорау тыуа: ни өсөн дәреслек төҙөүселәр үҙебеҙҙең башҡорт яҙыусыларының, шағирҙарҙың әҫәрҙәрен дәреслектәргә индереүҙән баш тарта? Ни өсөн үҙ телебеҙҙәге һәм башҡорт мөхитен сағылдырған әҫәрҙәр уларҙың күңеленә ятмай? Бәлки, бына ошо сәбәпле лә башланғыс кластарҙа башҡорт теле һәм туған әҙәбиәт дәрестәре берәр сәғәткә генә тороп ҡалғандыр?..

Ауылда урамға сыҡһаң, башҡортса һөйләшкән балаларҙы осратып булмай хәҙер. 1-се класс уҡыусыларынан "Башҡортса һөйләшә беләһегеҙме?" тип һорайым, яуап: "Юҡ, өйҙә лә русса ғына аралашабыҙ", - тиҙәр. Баҡтиһәң, хәҙер асыҡ дәрестәр ҙә тик рус телендә генә алып барыла икән. Мәғариф министрлығы нишләп был хәлгә иғтибар итмәй ҙә, ғалимдар нимә ҡарай? Әллә яҡын киләсәктә телебеҙҙе бөтөнләй бөтөрөп, рус телендә генә һөйләшергә өндәйҙәрме? Үткәрелгән төрлө йыйылыш, сараларҙа "Башҡортмон, әммә телде белмәйем", тигән булып, русса сығыш яһаусылар күбәйеүе лә шулай уйларға мәжбүр итә.

Һүҙемде йомғаҡлап, хөрмәтле дәреслек төҙөүселәргә өндәшкем килә. Зинһар өсөн дәреслектәргә балаларға аңлайышлы булған, үҙ яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәрен йәки шуларҙан өҙөктәр индерегеҙ. Мәҫәлән, Рәис Низамовтың "Икмәк тәме" хикәйәһен индерергә булыр ине, унда һуғыш йылы балаларының яҙмышы, аслыҡтан интегеүҙәре тураһында бәйән ителгән. Был, әлбиттә, Андерсендың "Русалочка"һына ҡарағанда фәһемлерәк булыр ине. Арҙаҡлы ғалимдарыбыҙ дәреслек әҙерләү комиссияһында түгелдәрме икән? Һис юғында, контролгә алһындар ине ошо эште.

**Зинфира САФИНА,**
**хаҡлы ялдағы уҡытыусы.**
**Мәсетле районы.**

УҠЫТЫУСЫҒА ЯРҘАМҒА

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН ӨЙРӘНЕҮМЕ?

## Ул заман менән бергә алға атлай

**Көндәлек тормошта компьютер, телефон һәм башҡа заманса техниканы ҡулланырға әүәҫ быуын балаларын дәрескә ылыҡтырыу, педагогтарҙың эшенә еңеллек килтереү маҡсатында Рәсәйҙә 2013 йылдан бирле "ЯКласс" мәктәптәр өсөн цифрлы белем биреү сығанағы эшләй. Баҡтиһәң, быйылдан башлап унда "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" предметы ла барлыҡҡа килгән. Был турала "ЯКласс"тың Башҡортостандағы вәкиле Морат Ишемғоловтан тулыраҡ мәғлүмәт алдыҡ.**




**➔ Нимә ул "ЯКласс" һәм унда башҡорт теле ниндәй урынды биләй?**

- "Мәғариф" милли проектын бойомға ашырыу сиктәрендә цифрлы белем биреү ресурстарын үҫтереү буйынса һуңғы йылдарҙа бик күп эштәр аткарыла. Уйлап ҡараһаҡ, яҡынса бер тиҫтә йыл эсендә генә был йәһәттән шундай алға китеш һиҙелә. Беҙҙең "ЯКласс" платформаһында мәктәптәрҙә уҡытылған барлыҡ предметтар буйынса дәреслек йөкмәткеһе, күнегеүҙәр, баланың белем кимәлен тикшерә торған эш төрҙәре, һ.б. бар. Бында уҡытыусылар, уҡыусылар һәм ата-әсәләр теркәлеү үтеп, контентты бушлай ирекле ҡуллана ала. Педагогтар бигерәк тә коронавирус пандемияһы осоронда "ЯКласс" платформаһының уңыйлылығын юғары баһаланы, сөнки унда уҡыусы дәрес темаһын өйрәнә, шунан күнегеүҙәрҙе, тәғәйен өйгә эштәрҙе үтәй, контроль эш йәки ниндәйҙер тест, викторина һорауҙарына яуап биреп, автомат рәүештә билдә алырға мөмкин. Уның алған билдәһе уҡытыусыға ла, атай-әсәйгә лә электрон журналдан асыҡ күренеп тора. Мәҫәлән, Себерҙә эшләп йөрөгән берәй атай улының өйгә эшен үтәү-үтәмәүен, ниндәй билдәгә өлгәшеүен ҡарай ала.

Башҡортостан уҡытыусылары был уңайлы сығанаҡты файҙаланыу буйынса Рәсәйҙә беренсе урында тора, шуға, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының да эшмәкәрлеген еңеләйтергә ярҙам итеү теләге тыуҙы. Был маҡсатта 2020 йылда тәүҙә республиканың колледж студенттары араһында беҙҙең платформала башҡорт теленән олимпиада ойоштορҙоҡ. БР Мәғариф министрлығы менән берлектә үткәргән ярышта 600-ләп студент ҡатнашты. Ә инде "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" тигән айырым предмет "ЯКласс" сығанағында барлыҡҡа килһен өсөн республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән 15 педагог тырышлыҡ һалып, Башҡортостандың Мәғариф министрлығы һәм Мәғарифты үҫтереү институты белгестәре ярҙамында был эште аткарып сыҡтыҡ. Башҡорт теле уҡытыусылары үҙҙәренең эш тәжрибәһенән сығып, 2-сенән 11-се класҡа тиклем ике йүнәлештә, башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр өсөн, контент тупланы. Хәҙер беҙҙең платформала теркәлеү үткән 12 миллионға яҡын кеше "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" предметын да күрә, теләге булғаны уны үҙ эшендә иркен ҡуллана ала. Беҙҙең эш төркөмө унар һорауҙан торған ете төрлө тест, төрлө викториналар, контроль эштәр һәм башҡаларҙан йәмғеһе 3015 эш төрөн тупланы. Әлеге көндә был эш дауам итә, мөмкин тиклем тиҙ арала "Рус теле" предметы бүлегендәге кеүек, тулы контент тупларға теләйбеҙ. Ул саҡта башҡорт телен башлап өйрәнергә теләгәндәр өсөн дә уңайлы буласаҡ, сөнки дәреслектәрҙәге теоретик өлөш тә урынлаштырыласаҡ.

Әйткәндәй, мин "ЯКласс" мәктәптәр өсөн цифрлы белем биреү сығанағы вәкиле булараҡ, Башҡортостанда ғына түгел, Силәбе һәм Ырымбур педагогтары менән дә эшләйем. Беҙҙең платформа мөмкинлектәрен хатта төпкөл ауылдарҙа ла бик әүҙем ҡулланалар, мин педагогтарға оҫталыҡ дәрестәре үткәреп, даими осрашып торам. Хәҙер теркәлмәй ситтә тороп ҡалыусылар юҡ кимәлендә. Башҡортостандың 70 проценттан ашыу уҡытыусыһы "ЯКласс" менән эшләй, ә Мәләүез һәм Борай гимназиялары Рәсәй буйынса - беренселәр.

**➔ Бөгөн беҙ балаларҙың былай ҙа телефон, компьютерға теклəп ултырыуына зарланабыҙ. Цифрлы белем биреү платформалары был хәлде тағы ла ҡатмарландырмаймы?**

- Һәр нәмәлә алтын урталыҡ кәрәк, бында ла аңлап эш итеү мөһим. Ни тиһәк тә, заман шулай цифрлы алдынғы технологияларҙы белеүҙе үҙе талап итә һәм был белемде дөрөҫ ҡулланғанда тормошобоҙҙо ла еңеләйтә. Йәш быуынды гаджеттарҙан нисектер айырып алыу йәһәтенән түгел, ә уларҙың шулар артында үткәргән ваҡытын файҙалыраҡ итеүҙе күҙаллап эшләргә кәрәк. Ниндәйҙер уйын урынына берәй оҫталыҡҡа өйрәткән сайтты асып уҡып ултырһа, бигерәк тә ул башҡорт теленә ҡағылған булһа, бер ҙә насар түгел. Һәм шул уҡ ваҡытта цифрлы белем биреү бер ҡасан да уҡытыусыны тулыһынса алмаштыра алмаясағын да яҡшы аңларға тейешбеҙ. Кешене үҙаллы белем эстәргә өйрәтеү мөһим һәм быны педагогтар ғына эшләй ала. Бигерәк тә тәрбиә биреү өлкәһендәге мәсьәләләр цифрлы мәғарифҡа һис яҡын түгел. Ә бөгөн мәктәп йәшендәгеләрҙең тәрбиәһенә иғтибар юғары.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" предметы шундай алдынғы онлайн-проекттарҙың береһендә урын алыуы ҡыуаныслы. Әлегә тел буйынса күберәк эшләнелһә лә, проект авторҙары киләсәктә башҡорт әҙәбиәте, тарихы һәм мәҙәниәтенә лә тейешле иғтибар бүләсәкбеҙ, тип ышаныслы белдерә. Тимәк, беҙ ҙә заман менән бергә атлайбыҙ.**

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

✓ *Табиптар Гиппократ анты биргән кеүек, уҡытыусылар ҙа балалар алдындағы бурыстарын ант менән нығытырға тейештер, күрәһең. Балаларҙы яратыу был анттың беренсе пункты булһа ине.*



АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА



# ЙӘНҺҮРӘТТӘР ТӘРБИӘЛӘЙМЕ?

**Бер көндө иртән иртүк торҙом да телевизор ҡабыҙҙым. Бөтә каналдарҙа тиерлек йәнһүрәттәр бара. Береһенән-береһе сағыуыраҡ. Пульт төймәләрен алмаштыра-алмаштыра әллә нисә йәнһүрәт ҡараным һәм... минең буласаҡ балаларым бындай йәнһүрәттәр ҡарамаясаҡ, тигән ҡарарға килдем.**

Заман йәнһүрәттәренең береһе лә кескәйҙәр өсөн түгел икән. Совет заманында сыҡҡандары, йәғни минең быуын ҡарап үҫкән йәнһүрәттәр менән 90-сы йылдарҙан һуңғылары араһында ҙур айырма бар. "Серая мышка", "Король Лев", "Кот Леопольд", "Дюймовочка", "Золушка" - улар беҙҙең быуындыҡы. Улар тәрбиәүи яҡтан бик көслө. Ярҙамсыллыҡ, тоғролоҡ, илһөйәрлек, дуҫлыҡ кеүек темалар ярылып ята унда. Ундай йәнһүрәттәрҙән балалар ыңғай эмоция ала, шатлана, уларҙың кисерештәрен үҙҙәре аша үткәрә.

Бөгөнгө йәнһүрәттәрҙә иһә әхлаҡҡа урын юҡ. Геройҙарҙың ыңғайҙары ла, киреләре лә йәмһеҙ. Кеше тиһәң, кеше түгел, йәнлеккә лә оҡшамағандар. Телмәрҙәрендә әллә ниндәй жаргон һүҙҙәр ҡулланалар, бер-береһен кәмһетәләр. Уларҙа криминалға, үлтерешкә, талаш-тартышҡа ҙур урын бирелә. Бынан бернисә йыл элек ниндәйҙер каналдан Арнольд исемле малай тураһында йәнһүрәт күрһәткәйнеләр. Унда кем ыңғай, кем кире образ икәнен дә айырыуы ҡыйын. Мәҫәлән, "Маша и Медведь" йәнһүрәтендәге "Давай лечиться" өлөшө балаларға ниндәй тәрбиә бирә? Бына бәләкәй ҡыҙ Маша "Ашығыс ярҙам" машинаһынан клизма эшләй торған яйлама табып ала ла, "Давай лечиться" тигән һүҙҙәрҙе ҡабатлай-ҡабатлай үҙенән әллә нисә тапҡыр ҙур бүренең ҡойроғо аҫтына ынтыла. Был күренеш кескәйҙәргә ниндәй тәрбиә бирә һуң? Һуңынан, балалар ҡайҙан бөтәһен дә белә икән, тип аптыраған булабыҙ.

Бындай йәнһүрәттәрҙең авторҙары, ата-әсәләр, балалар йәнһүрәттәрҙе күңел асыу, ваҡыт үткәреү өсөн генә ҡарамай, ә уларҙы ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә, бик күп яңы нәмәгә өйрәнә, күренештәр, атамалар, һүҙҙәр менән таныша, тип уйлап ҡарағаны бармы икән? Шуға күрә йәнһүрәт һайлағанда бик иғтибарлы булырға кәрәк, тип уйлайым. Һис юғында, йәнһүрәтте ҡарағандан һуң бала менән бергә уның тураһында фекер алышығыҙ. "Нимә яҡшы, нимә насар" булыуы хаҡында бәхәс ҡороғоҙ. Бының өсөн, әлбиттә, йәнһүрәтте бала менән бергә ҡарарға кәрәк. Юғиһә, ҡайһы бер ата-әсә ниндәй йәнһүрәт икәнен дә белмәй, диск һатып ала ла ултыртып ҡуя балаһын телевизор алдына. Бары тик шауламаһын, ҡамасауламаһын, күҙ алдында, өйҙә генә ултырһын, тип уйлай. Тик баланың урамға сыҡмай, тиҫтерҙәре менән аралашмай ғына ултырһа ла, үрҙә атап кителгән йәнһүрәттәрҙе ҡарап, тәрбиәһеҙ, тупаҫ булып үҫеүе бик мөмкин.

Һәм тағы. Бөгөн бала тап шул русса йәнһүрәттәр ҡарап, туған теленән биҙрәй икәнен дә онотмағыҙ. "Тамыр" балалар телеканалы хәҙер күп йәнһүрәттәрҙе башҡортсаға тәржемә итә. Теле саҡ асылған мәлдә шул йәнһүрәттәрҙе ҡаратығыҙ балаларығыҙға. Ҡат-ҡат ҡуйһағыҙ ҙа, улар уны ҡараясаҡ, хатта ятлап аласаҡ. Ғөмүмән, "Тамыр" телеканалында башҡорт теленә ылыҡтыра торған башҡа тапшырыуҙар ҙа етерлек.

**Мәхмүзә АБДРАХМАНОВА.**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# ИТ ИЗГЕЛЕК - КӨТ ИЗГЕЛЕК



**Уҡыу йылы башланған көндә уҡытыусы үҙенең былтырғы бишенсе кластар алдында баҫып тора. "Һеҙ минең яратҡан уҡыусыларым, мин бөтәгеҙҙе лә яратам һәм һеҙҙе яңынан күреүемә бик шатмын", - ти ул, балаларға ҡарап.**

Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, уның был һүҙҙәре дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәй: беренсе рәттә бөршәйеп кенә ултырған малайҙы уҡытыусы бөтөнләй яратмай. Был класс уҡыусылары менән ул былтыр тәүгә осрашҡайны һәм шунда уҡ малайҙың класташтары менән бөтөнләй аралашмауына аптырағайны. Үҙе бысраҡ, туҙып бөткән кейемдә йөрөй, етмәһә, унан һаҫыҡ еҫ сыға, әйтерһең дә, бер йыл буйы йыуынмаған. Уҡытыусыларҙың береһе лә уға иғтибар бүлмәй, ваҡыт үтә килә класс етәксеһе лә уға ҡул һелтәне, ул ғына ла түгел, дәфтәрҙәрен тикшергәндә ҡыҙыл пасталы ручкаһы менән был баланың эштәрен сыймаҡлап, ҙур итеп "бер" билдәһе ҡуйыуҙан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә башланы.

Бер көндө директорҙың уҡытыу буйынса урынбаҫары балаларҙың "Личное дело"ларын тикшереп сығырға ҡушты. Әлбиттә, уҡытыусы яратмаған уҡыусыһының ҡағыҙҙарын иң аҙаҡ ҡарармын, тип, ситкә һалып ҡуйҙы. Башҡа балаларҙыҡын ҡарап сыҡҡандан һуң был баланың характеристикаларын уҡый башлағас, иҫе китте. Беренсе класс уҡытыусыһы уның тураһында: "Малай бик шаян һәм аҡыллы уҡыусы. Өйгә эштәрен таҙа һәм матур итеп эшләй. Ул эргәһендәгеләргә шатлыҡ өләшеп йәшәй", - тип яҙғайны. Икенсе класта уҡығанда уның тураһында: "Малай тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшә, уны бөтәһе лә ярата. Ихлас йылмайыуы башҡаларға шатлыҡ өҫтәй, әммә һуңғы ваҡытта ул бик күңелһеҙ йөрөй, сөнки әсәһе ныҡ ауырый. Ғаиләләре ауыр осор кисерә", - тип яҙылған. Өсөнсө класта: "Әсәһенең үлемен бала бик ауыр кисерҙе. Бар хәленсә тырышып ҡарай, тик атаһы уға бөтөнләй иғтибар бүлмәй. Әгәр киләсәктә лә ошолай дауам итһә, ул уҡыуына ҡул һелтәйәсәк", - тип яҙылған. Дүртенсе класс уҡытыусыһы: "Малай үҙенә бикләнде, бер кем менән дә һөйләшмәй, бөтөнләй уҡымай, дуҫтары ла юҡ. Ҡай саҡ дәрес ваҡытында йоҡлап китә", - тип яҙған. Уҡытыусыға үҙенең ҡылыҡтары өсөн оят булып китте, баланың күңел торошон аңлағандай булды ул. Яңы йыл алдынан уҡытыусы бигерәк тә уңайһыҙ хәлгә ҡалды. Бөтә балалар уҡытыусыға тәғәйен бүләктәрен төрлө төҫтәге матур ҡағыҙҙарға төрөп, таҫмалар менән бәйләгән, ә малайҙың бүләге таушалып бөткән иҫке ҡағыҙға төрөлгәйне. Уҡытыусы ҡағыҙҙы тағатҡас, уның эсенән бер нисә ҡиммәтле ташы төшкән беләҙек һәм яртылаш бушаған хушбуй һауыты килеп сыҡты. Ҡайһы бер балалар шарҡылдап көлә башланы, әммә уҡытыусы уларҙы ым менән туҡтатты. "Ҡайһылай матур беләҙек!" тине ул, хушбуйҙы еҫкәп ҡараны. Дәрес бөткәс, малай уҡытыусы эргәһенә килде. "Һеҙҙән минең әсәйемдең еҫе килә", - тине ул. Балалар ҡайтып бөткәс, уҡытыусы бүлмәлә яңғыҙы ҡалып, оҙаҡ иланы. Ошо көндән ул әҙәбиәт дәрестәрен бөтөнләй икенсе төрлө уҡыта башланы, изгелек тураһында йышыраҡ һөйләр булып китте. Уҡыусыға ҡарата мөғәмәләһе нәфрәттән һөйөүгә әйләнде. Уҡытыусы яратмаған уҡыусыһына иғтибарҙы күберәк бүлде, һәм ул яйлап элекке хәләтенә ҡайта башланы. Уҡыу йылы аҙағына бала класта иң тырыш уҡыусылар иҫәбендә ине. Ошо саҡта ла уҡытыусы, мин һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә бер тигеҙ яратам һәм ихтирам итәм, тине, әммә ул тағы ла алдашты, сөнки класта уның иң яратҡан уҡыусыһы бар ине...

Киләһе уҡыу йылында уҡытыусыны башҡа класҡа етәксе итеп тәғәйенләнеләр. Бер көн дәрестән һуң дәфтәр тикшереп ултырғанда кемдер тулыһынса ябылмаған ишеккә ҡағыҙ киҫәге ҡыҫтырып китте. "Һеҙ беҙҙе уҡытмаһағыҙ ҙа, минең өсөн һеҙ иң яратҡан уҡытыусым", тип яҙылғайны дәфтәрҙән йыртып алынған ҡағыҙ битенә. Уҡытыусы яратҡан уҡыусыһының яҙыуын шундуҡ таныны...

Ваҡыт уҙа торҙо, биш йылдан уҡытыусы уҡыусыһынан хат алды. Ул колледж бөтөп, университетҡа инеүе тураһында хәбәр иткәйне. "Һеҙ һаман да минең иң яратҡан уҡытыусым", тип тамамланғайны хат. Тағы биш йылдан ул университет тамамлауын хәбәр итте. Дүрт йылдан тағы бер хат килде. Был юлы ла уҡыусыһы уҡытыусыһына һоҡланып яҙғайны. Һәр саҡтағылай: "Һеҙ минең иң яратҡан уҡытыусым", - тип тамамланғайны хат. Фамилияһы эргәһенә фән докторы дәрәжәһе өҫтәлгәйне...

Ваҡыт үтә торҙо. Бер хатында ул кәләш алырға йыйыныуы тураһында хәбәр итте. Ике йыл элек атаһы үлеп ҡалған икән, шуға күрә туй ваҡытында әсәһе урынына уҡытыусыһын саҡырғайны. Уҡытыусы, әлбиттә, ҡыуанып ризалығын белдерҙе. Туй көнөнә ҡасандыр уҡыусыһы бүләк иткән беләҙекте кейҙе, ул бүләк иткәндәге кеүек хушбуй һатып алды. Улар осраштылар. Уҡыусы уҡытыусыһын ихлас ҡосаҡланы, ҡасандыр әсәһенән килгән хушбуй еҫен таныны ул. "Рәхмәт, уҡытыусым, һеҙ мине яманлыҡты яҡшылыҡтан айырырға өйрәттегеҙ, үҙ көсөмә таянып йәшәргә кәрәклеген аңлаттығыҙ", тине ул. Уҡытыусы күҙ йәштәрен йәшермәйенсә: "Юҡ, яңылышаһың, киреһенсә, һин мине күп нәмәгә өйрәттең. Һине осратҡас ҡына мин нисек уҡытырға кәрәклеген аңланым", - тине.

Ҡыҙғаныс кинәйә, шулаймы? Табиптар Гиппократ анты биргән кеүек, уҡытыусылар ҙа балалар алдындағы бурыстарын ант менән нығытырға тейештер, күрәһең. Балаларҙы яратыу был анттың беренсе пункты булһа ине. Антон Семенович Макаренконың "Педагогическая поэма"һын, Василий Александрович Сухомлинскийҙың "Сердце отдаю детям" китабын уҡыған совет осоро уҡытыусылары әйткәндәремде уйынға һабаштырмаҫ, етди ҡабул итер, тим. Белем биреү менән тәрбиәүи мәсьәләләр бергә үрелеп, гуманистик нигеҙҙәргә ныҡлы таянып, мәңге йәшәр кеүек ине. Тарҡалды, юҡҡа сыҡты. Ярсыҡтар, ғәҙәттә, киҫелгән икмәк телемдәре кеүек, кире ялғанмай. Ә бит яңы уҡытыу стандарттары изге ниәттән башҡарыла һымаҡ тойолдо, хатта ки мауыҡтырғыс, ымһындырғыс, яҡты киләсәккә илтеүсе юл сатына оҡшағайны - сатралар (юлдар киҫешкән урын) ҡурҡыныс янауын абайламаныҡ.

Буш һүҙ булмаһын өсөн ябай ғына миҫалдар аша эштең айышына төшөнөп ҡарайыҡ. Мәҫәлән, уҡыусыға ултырғыс эшләргә ҡуштылар, ти. Традицион уҡытыу шарттары буйынса уҡытыусы балаға әҙер чертеж бирә лә, бала шунан тайпылмайынса ултырғыс эшләргә тейеш. Билдә бирелгән үлсәмдәргә тап килтереп эшләүгә ҡарап ҡуйыла. Уҡытыусы уҡыусының эшен ҡарап өйрәтеп торорға тейеш. Яңы стандарт буйынса нисек? Бында уҡыусыға ирек бирелә, уҡытыусы өйрәтмәй, ул күҙәтеүсе булараҡ ҡына ҡатнаша был процеста. Билдәне лә уҡытыусы түгел (сөнки ул күҙәтеүсе генә!), ситтәр ҡуя. Уҡыусы нисек теләй, шулай эшләргә тейеш - үлсәмдәр, ҡалыптар юҡ. Хөрриәт! Был бер бала миҫалында. Ә мәғариф системаһын алғанда, әлеге лә баяғы ирекҡә һылтанып, әллә күпме программалар, китаптар хасил булды - бәшмәктәр улай тиҙ таралмайҙыр. Уҡытыусылар күҙәтеүсегә әйләнде, билдәне компьютер ҡуя башланы. Хөрриәт бөттө! Тәрбиә эшенән ситләтелгән күҙәтеүселә яратыу тойғоһо, булған хәлдә лә, тәрән булмай - дәрес биреүсе менән ысын мәғәнәһендәге педагог араһындағы айырма ер менән күк араһындай. Ситкә этәрелгән телһеҙ ҡалған уҡытыусы урынын тиҙ арала гаджеттар аша интернет даръяһы йотто - рәхәт: әрләмәй, билдә ҡуймай, мөйөшкә баҫтырмай, әммә үҙенекен эшләй - робот биоробот барлыҡҡа килтерә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Имсәк баланың күҙҙәренә ҡарағанығыҙ барҙыр. Унда бер генә тамсы булһа ла мин-минлек, уҫаллыҡ, мәкерлек, хәйлә, алдашыу кеүек сатҡылар бармы? Юҡтыр. Булмаһа, ҡайҙан барлыҡҡа килә буласаҡ шәхестә негатив ҡараш, йәмһеҙ холоҡтар? Эйе, эйе, һөйөү етмәгән урынды, ҡый үләне һымаҡ, нәфрәт баҫа.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

***✓ Бала - ул ата-әсәнең сағылышы. Әлбиттә, ул шәхес, тик ул ата-әсәһе нимә өйрәткән, шуны ғына эшләй белә. Өлкән кешегә был насар, тип аҡыл өйрәтергә була әле, ә бала быны аңламай.***



ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ҮҘЕҢ НИНДӘЙҺЕҢ - БАЛАҢ ДА ШУНДАЙ

**Башта уҡ шуны әйтеп китергә кәрәк - баланы нисек дөрөҫ тәрбиәләргә тигән һорауға аныҡ ҡына яуап биреүе ауыр. Сөнки бала тәрбиәләүе - индивидуаль эш, унда бер ниндәй ҙә дөйөм алымдар булыуы мөмкин түгел. Шуны ғына әйтергә мөмкин, тәрбиә эшендә олатай ҙа, өләсәй ҙә, махсус белемле бала ҡараусы ла түгел, ә тап ата-әсә төп ролде башҡарырға тейеш.**



Бөгөнгө атай-әсәйҙәр - илдә үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуңғы осор балалары, улар бөтөнләй икенсе ҡиммәттәр, коллективизм нигеҙендә тәрбиәләгән, ә бөгөн иһә индивидуаллек көслө. Әлбиттә, был тәрбиә тәрә яҡшы, быныһы насар тип әйтергә ярамай, әммә һәр нәмәнең үҙ ваҡыты икәнен оноторға тейеш түгелбеҙ, икенсе ҡиммәттәр алға сыҡҡан икән, тимәк, шулай кәрәк. Мине психолог булараҡ икенсе нәмә нығыраҡ борсой. Бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа ата-әсә донъя мәшәҡәттәрен алға ҡуйып, балаһын йышыраҡ иғтибарһыҙ ҡалдыра. Беҙҙең балалар үҙебеҙҙән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй. Уны нисек тәрбиәләргә - быны ла беҙ генә хәл итәбеҙ. Иң тәүҙә ата-әсә ошо яуаплылыкты тойһон ине.

Балаға ғаиләнең матди, мораль шарттары ла, ундағы психологик мөхит тә йоғонто яһай. Әхлаҡи сифаттар ғаилә ағзалары араһында ышаныс, бер-береңә ярҙам итеү, хәстәрләү мөнәсәбәттәре булғанда ғына формалаша ала. Йәғни, бәхетле шәхес формалашһын өсөн ата-әсәгә балаға ҡарата ғына түгел, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен дә, шулай уҡ йәшәү рәүешен, уйҙарын, тормошҡа ҡарашын да яйға һалыу кәрәк.

Икенсенән, ғаиләлә яратыу булырға тейеш. Ысын мөхәббәт - ул сит күҙҙәр өсөн, бәлки, күнелһеҙ ҙә тойолалыр. Ир кеше үҙен ир һәм атай, ҡатын кеше ҡатын һәм әсәй тип тоя һәм бынан кинәнес ала икән, күҙҙәр бәхеттән гел көлөп тора икән, бына ошо инде ул ысын яратыу. Тауыш-талаш, юғары хистәр, һауыт-һаба ярылыуын фильмдар өсөн ҡалдырығыҙ, был хисте ғашиҡлыҡ тип кенә атап була. Ә ысын мөхәббәт - ул күпкә тәрәнерәк хис. Атай менән әсәй бер-береһен яратҡан ғаиләлә генә бала үҙен ышаныслы тоя, ул эмоциональ яҡтан сәләмәт була. Атай менән әсәй бер-береһен ярата икән, улар балаһын да яратасаҡ. Баланды яратаһың икән, тәрбиә эшендә барыһын да дөрөҫ эшләйәсәкһегеҙ. Шул саҡта барыһы ла аңлашылып торасаҡ, ҡайҙа тыйырға, ҡайҙа ирек бирергә икәнен дә һиҙемләйәсәкһегеҙ. Баланың тормошондағы ваҡиғалар менән ихлас ҡыҙыҡһыныу, уның балаларса проблемаларын хәл итергә ярҙамлашыу - былар ҙа яратыу билдәһе. Яратырға яратыу аша ғына өйрәтеп була, шуға сабыйҙарығыҙҙы яратығыҙ һәм яратыуығыҙҙы бер ҡасан да йәшермәгеҙ.

Бала яратыу нигеҙендә тәрбиәләнә икән, уға ата-әсәһе бер ҡасан да, теләһә нимә эшлә, тип әйтмәйәсәк. Баланы ҡыҫҡа дилбегәлә талапсан итеп тоторға була, әлбиттә, улар яҡшы уҡыясаҡ, һеҙ теләгән һөнәргә эйә буласаҡ, һеҙ теләгән түңәрәктәргә йөрөйәсәк, тик быңдай балалар ҙурайғас бер мәнә лә үҙҙәре хәл итә алмаясаҡ. Һеҙҙең маҡсат - балаға тормошта үҙ юлын табырға ярҙам итеү. Шул саҡта ул бәхетле була, алдында асылған һәр офоҡ уға бәхет килтерә, сөнки ул үҙенең юлынан бара.

Бала - ул ата-әсәнең сағылышы. Әлбиттә, ул шәхес, тик ул ата-әсәһе нимә өйрәткән, шуны ғына эшләй белә. Өлкән кешегә был насар, тип аҡыл өйрәтергә була әле, ә бала быны аңламай. Бала күберәк осраҡта ни өсөн үҙен тыйғандарын, нимәнәлер эшләргә рөхсәт итмәгәндәрен дә аңламай. Атаһы, әсәйең менән талашма, тип, үҙе бер нисә минуттан ҡатыны менән һүҙгә килешә икән, йәки, тәмәке тартма, тип, үҙе балконға тәмәке тартырға сығып китә икән, бала уның нәсихәттәренән һабаҡ алмаясаҡ. Балалар беҙҙең һүҙҙәрҙе ишетмәй. Юҡ, улар һаңғырау түгел, тик беҙҙең нимә әйтергә теләгәнде аңламай, әммә ҡылыҡтарыбыҙҙы ҡабатлай. Һүҙҙәребеҙ һәм ҡылыҡтарыбыҙ араһында айырмалыҡтар күберәк булған һайын, улар донъяны аңлай алмай башлай. Ә аңлашылмаған нәмә һәр ваҡыт ҡурҡыу тойғоһо уята. Һөҙөмтәлә, бала донъяны һәм ҡылыҡтарҙы үҙе аңлағанса ҡабул итә лә, шулай йәшәүгә ҡулайлаша.

Тимәк, кешенең ниндәй булыры бала саҡта һалына. Ғаилә институты эшләй икән, киләсәк быуын өсөн хәүефләнергә кәрәкмәй, ул физик һәм рухи яҡтан сәләмәт буласаҡ. Мәктәп тә, балалар баҡсаһы ла, юғары уҡыу йорттары ла балаға, ата-әсәләр, һеҙҙең тәрбиәне бирә алмай. Эйе, кешене ҙурайғас та тәрбиәләргә мөмкин, тик был бик ауыр процесс. Өлкән кешегә нимәнәлер үҙгәртеү өсөн күп ихтыяр көсө кәрәк. Әгәр ҙә ул бының нисек эшләргә белмәй икән, түңәрәк ябыла һәм кеше шунда аҙашып тик йөрөйәсәк.

**Ринат ФӘРРӘХОВ,**
**педагог-психолог.**

МАТУР ХӘТИРӘ

# МӘКТӘП ЙЫЛДАРЫНДА...

## мәҙәк хәлдәр күп була



**"Матур хәтирә" тигән рубрика бар ине "Киске Өфө" гәзитендә. Ул рубрика бик һирәк кенә килеп сыға. Күрәһең, гәзитебеҙҙе уҡыусылар үҙ хәтирәләре менән уртаҡлашырға ваҡыт тапмай. Бына әле яңы уҡыу йылы башланыр алдынан ошо рубриканы яңыртып, мәктәп йылдарындағы ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында ла яҙып ебәрергә булдым әле. Гәзит уҡыусылар араһында, моғайын, мәктәп йылдарындағы, йәшлек ваҡытындағы ҡыҙыҡ һәм матур хәтирәләр һаҡлаусылар барҙыр, бәлки улар ҙа миңә ҡушылыр, тип өмөт итәм.**

● Инде стажлы пенсионер булһам да, мәктәптә уҡыған йылдарҙағы ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы йыш иҫкә төшөрәм. Бына шуларҙың береһе тураһында һөйләйем әле. Пединститут студенттары беҙҙең мәктәптә практика үтә ине. Бына бер көндө бер егет дәрес бирә. Ул класыбыҙға инеп, матур итеп яңы тема аңлатты һәм уҡыусыларҙың уның һөйләгәндәрен үҙләштерҙеме-юҡмы икәнен белер өсөн өҫтәмә һорау бирҙе. Берәү ҙә ҡул күтәрмәгәс, ҡарашын журналға төбәне. Әлбиттә, ундай саҡта бүлмәлә тынлыҡ урынлаша. Студент алфавит буйынса теҙелгән фамилиялар буйлап бармағын йүгертте лә, Йәнбулатов яуап бирә, тип, тынып ҡалған уҡыусыларға төбәлде. Йәнбулатов Әхмәт аяғүрә тороп баҫты ла, түбә таҡтаһына ҡарап, һорауға яуап эҙләй башланы. Беҙ ҡымшанмай ғына, тын ҡалып ултырыуҙы дауам итәбеҙ. Шул саҡ таҡта тапҡырындағы иҙән ярығынан кескәй генә сысҡан балаһы килеп сыҡты. Ул, ниңә былар тып-тын ултыралар икән, тип аптыраны шикелле, беренсе рәттә ултырған уҡыусының янына уҡ килеп, уның аяҡ аҫтында урала башланы. Беҙ барыбыҙ ҙа "кескәй ҡунаҡты" ҡыҙығып күҙәтәбеҙ. Сысҡан тураһында практикант менән Әхмәт кенә белмәй. Ә ахмаҡ сысҡан балаһы бүлмә буйлап йүгереп йөрөй рәхәтләнеп. Бер мәл студент ағайыбыҙ бөтә уҡыусыларҙың күҙ ҡарашы иҙәнгә төбәлгәненә иғтибар итте һәм кескәй генә һоро туптай тәгәрәп йөрөгән сысҡан балаһын күреп ҡалды. Шунан ул шым ғына, һаҡ ҡына сысҡан янына яҡынлап, аяғын һелкетеп, "кескәй ҡунаҡты" ҡыуып маташты. Ә сысҡан уның менән уйнаусы табылыуына бик шатланды шикелле, ағайыбыҙҙың аяғ тирәләй сабып-йүгергеләй башланы. Шул саҡ Йәнбулатов та сысҡанды күреп ҡалды һәм бармағы менән төртөп күрһәтеп, бүлмәне яңғыратып: "Сысҡан, кескәй генә сысҡан балаһы!" - тип ҡысҡырып ебәрҙе. Гөр килешеп көлөштөк. Дәрес тамамланыуын белдереп, ҡыңғырау тауышы яңғыраны. Студент ағайыбыҙ көрһөнөп: "Дәрес тамам..." - тигән булды. Ә сысҡан ҡыңғырау тауышынан ҡурҡып, өнөн таба алмай буталанды. Әхмәт йүгереп барып ахмаҡ сысҡанды эләктереп алды ла: "Рәхмәт һиңә, минең ҡотҡарыусым!" - тип, уны өңөнә индереп ебәрҙе...

● Мәктәп йылдарындағы ҡыҙыҡтар бик күп инде ул. Бына тағы береһе тураһында. Бала саҡта минең бер гәҙәтем бар ине. Дәрес тыңлағанда, аяҡ кейемдәремде сисеп, иркенләп ултырырға ярата инем. Минең был гәҙәтемде классташтар ҙа белгән булған, күрәһең. Бер саҡ тарих дәресендә уҡытыусы ағай мине таҡта янына саҡырҙы. Тиҙ генә эйелеп, аяҡ кейемдәремде кейәйем, тиһәм, улар юҡ булған. Ҡыҙарынып тороп баҫтым да: "Ағай, таҡта янына сыға алмайым, туфлиҙарым юғалды", - тинем. Синыфташтарым гөр килешеп көлдө, ә кемдер: "Уның аяҡ кейемдәре өйөнә ҡайтып киткән", - тип өҫтәне. Әлдә уҡытыусыбыҙ һәйбәт ине: "Ярай, улайһа, урынында ултырып ҡына яуап бир", - тине. Шаян Ринат дәрестән һуң аяҡ кейемемде алып килде. Ҡәнәғәт, ауыҙы ҡолағынаса йырылған.

● Тағы бер хәтирә. Бишенсе синыфта беҙ география фәнен өйрәнә башланыҡ. Ул фәнде оло йәштәрҙәге уҡытыусы алып бара. Шуға ла мин уға ҡарата ниндәйҙер йәлләү хисе кисерә инем. Аҡрын ғына атлап йөрөй, тауышы ла тоноҡ ҡына сыға. Йәлләп, үҙемсә уға ярҙамлашҡан булам, гел генә уның ҙур картаһын, башҡа әсбаптарын география кабинетына алып килешә торғайным. Бер дәрестә уҡытыусы: "Урта быуаттарҙа фән асыштары дин ҡалыптарына тап килмәнә, ғалимдарҙы язалағандар йәиһә төрмәгә япҡандар",- тип һөйләнә. Уҡыусылар ул ғалимдарҙы йәлләп, бер-береһе менән фекер алыша башланы. Бүлмә гөж килеп тора. Уҡытыусы нисек тынлыҡ урынлаштырырға белмәй. Шул саҡ ул: "Галелео Галелей судтан һуң нимә тип әйткән?" - тигән һорау бирҙе. Беҙ бөтәбеҙ ҙә тынып ҡалдыҡ. Йәлләү хисенә бирелеп, уҡытыусының һуңғы һөйләмен тыңлап бөтөрмәгәнбеҙ икән. Тынлыкты иң арткы партала ултырырға яратыусы Факиһа Әлимбаева бүлде. Ул ҡулын күтәреп, тороп баҫты ла: "Галелео Галелей "А все таки Земля вертится!" тип әйткән", - тип, яуап бирҙе. Уҡытыусы киң йылмайып: "Әлимбаева, мин һиңә яуабың өсөн биш билдәһе ҡуям!" - тип, журналға эйелде. Шунан: "Эйе, кешелек таныймы, юҡмы, Ер шарыбыҙ үҙ күсәрендә әйләнә, был ысынбарлыҡ", - тип өҫтәне...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эйе, таныйбыҙмы, юҡмы, Ер шары үҙ күсәрендә әйләнә. Таныйбыҙмы, юҡмы, баш ҡалабыҙ Өфөнөң йәше 1500 йылдан ашыу икәнен ғалимдар күптән иҫбат итте. Таныйбыҙмы, юҡмы... Был исемлекте бик оҙаҡ дауам итергә булыр ине. Бөгөн кешеләр бер нимәгә лә ышанмаусыға, битарафҡа әйләнде. Уларға ҡарайһың да, бына шул бөгөнгөнө элеккеләр менән сағыштырыуға, бала саҡ, йәшлек хәтирәләренә төшөп китәһең дә инде: беҙ гел яҡтыға, гел яҡшыға ышанып йәшәгәнбеҙ һәм шуның менән бәхетле булғанбыҙ икән. Шулай түгелме ни? Әйҙәгеҙ, ошо бәхетле мәлдәр, ҡыҙыҡлы хәтирәләр менән уртаҡлашайыҡ әле гәзитебеҙ биттәрендә.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

**✓ Белем биреү ойошмаһы оҙайтылған көн төркөмдәрен асыу тураһында ҡарарҙы ата-әсәләрҙең фекерен иҫәпкә алып ҡабул итергә тейеш. Бындай төркөмдәрҙә дәрескә әҙерләнеү, түңәрәктәр, секциялар зарур.**



НӘҪЕЛ ҒОРУРЛЫҒЫ

# БАРЫБЫҘ ҘА УҠЫТЫУСЫЛАР!




*Айгөл Ураҙгилдина ҡустыһы Илгиз Нәҙерғолов менән.*

**Сибай медицина колледжының производство практикаһы мөдире Айгөл Ураҙгилдина "Педагогик династия" төбәк-ара конкурста Исламғоловтар нәҫеле исеменән сығыш яһап, гран-при яуланы.**

Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлау, мәғариф алдынғыһы, юғары категориялы уҡытыусы Айгөл Ғәйнетдин ҡыҙы М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында ойошторолған сарала дөйөм педагогик стажы 800 йылдан ашыу тәшкил иткән Исламғоловтар нәҫеленең намыҫын яҡлап сығыш яһаны. Был нәҫелдән иң арҙаҡлы уҡытыусыларҙың береһе - Ғәфүрә Әфтәх ҡыҙы Исламғолова, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Баймаҡ районы мәктәптәрендә балаларға белем биргән. Ул "Бөйөк Ватан һуғышындағы Еңеүҙең 60 йыллығы" юбилей миҙалы менән наградланған. Айгөл Ғәйнетдин ҡыҙына инәй тейешле Мәхмүзә Әфтәх ҡыҙы Исламғолова иһә, 1957 йылда Баймаҡ районы Әхмәр ауылы мәктәбендә башланғыс класс уҡытыусыһы булып эш башлай. Уның намыҫлы хеҙмәте РСФСР мәғариф министрлығының Почет грамотаһы менән баһаланған. Мәхмүзә Исламғолова әлеге ваҡытта Ярат ауылында йәшәй һәм хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, ауыл тормошонда әүҙем ҡатнаша, "Атайсал" гәзите менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә. Уның өлкән ҡыҙы Наилә Хәкимйән ҡыҙы Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, юғары категориялы уҡытыусы. Баймаҡ районының Покровка мәктәбендә етәксе вазифаларҙа эшләне, һуңғы йылдарҙа Сибай гимназия-интернатында балаларға математика фәненән һабаҡ бирә. Дәрәжәләр биләһә лә, уҡытыусы булмышына тоғро ҡалып, математика фәненән белем биреүен һис ташламаны.

Исламғоловтар нәҫеленән иң йәш уҡытыусы - Наилә ханымдың ҡыҙы Юлиә Владимировна. Ул Өфө ҡалаһы мәктәптәренең береһендә башланғыс класс уҡытыусыһы булып эшләй.

Айгөл Ғәйнетдин ҡыҙының бер туған апайы Мәҙинә Нәҙерғолова ла Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән маҡтаулы исем йөрөтә. Ул Йылайыр районының Ҡашҡар ауылында рус теле һәм әҙәбиәтенән белем бирә. Мәҙинә Нәҙерғолованың ҡыҙы Нурзилә Нәҙерғолова Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, "Башҡорт теле һәм әҙәбитәте уҡытыусыһы - 2018" төбәк-ара конкурсы еңеүсеһе. Әлеге ваҡытта ул Өфөнөң 5-се лицейында башҡорт балаларына туған телдән дәрес бирә. Нәҙерғоловтарҙың улдары Илгиз Дәүләтгәрәй улы Өфө балалар сәнғәт мәктәбендә ҡурайҙан уҡыта. Бик күп республика һәм төбәк-ара конкурстар лауреаты.

- Конкурста сығыш яһау өсөн бүленгән ваҡыт эсендә нәҫелебеҙҙең барлыҡ уҡытыусылары хаҡында һөйләп өлгөрә алманым. Зат-ырыуымдың шундай уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы булыуы менән сикһеҙ ғорурланам! Ярышҡа мине төрлө яҡлап әҙерләргә ярҙам иткән колледж коллективына, туғандарыма рәхмәтем сикһеҙ. Был беҙҙең дөйөм еңеү! - ти Айгөл Ғәйнетдин ҡыҙы, ҡыуанысын йәшермәй. Мөғәллимлекте быуындан-быуынға тапшырып, нәҫел ҡиммәттәренә хыянат итмәгән Исламғоловтарға уңыштар теләйбеҙ.

**Люциә ҒӘББӘСОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯРҘАМ ИТ!

**Быйыл БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы 12-се тапҡыр "Мәктәпкә әҙерләнергә ярҙам ит" тигән мәрхәмәтлек акцияһы ойоштора.**
**Ул 1 июлдән 31 августа тиклем дауам итә. Сараның төп маҡсаты - ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләргә балаларын яңы уҡыу йылына әҙерләргә ярҙам итеү.**



Мәктәп кәрәк-яраҡтарын район-ара "Ғаилә" үҙәктәренә һәм уларҙың республика район-ҡалаларындағы бүлексәләренә килтерергә мөмкин. Йәй һуңында йыйылған барлыҡ ярҙам министрлыҡ ҡарамағындағы халыҡты социаль яҡлау учреждениеларында иҫәптә торған ғаиләләргә тапшырыласаҡ. Акцияға ҡушылып, аҙ тәьмин ителгән, күп балалы, тулы булмаған ғаиләләргә һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә теләгән кеше ярҙам итә ала. Бының өсөн канцелярия тауарҙары, дәфтәрҙәр, һүрәт төшөрөү өсөн кәрәкле әйберҙәр, балалар ижады өсөн тупланмалар алып, тапшырырға кәрәк. Яңы булмаһа ла, яҡшы торошта булған портфелдәр, мәктәп формалары, дәреслектәр, әҙәби китаптар ҙа ҡабул ителә. Акцияға ҡушылыу өсөн, Башҡортостандың www.семьярб.рф ғаилә порталында йәиһә "Ғаилә" үҙәктәренең берҙәм 8-800-347-5000 номеры буйынса шылтыратып, тулыраҡ мәғлүмәт алырға мөмкин.

Әйткәндәй, былтыр 13 миллион һумлыҡ кәрәк-яраҡ йыйылып, 11568 балаға ярҙам күрһәтелгән. Акцияла төрлө дәүләт учреждениелары, ҡалалар, райондар, ауыл биләмәләре хакимиәттәре коллективтары ҡатнашҡан. Йыл һайын акцияға ҡушылған эре коммерция предприятиелары, кампаниялары, урта бизнес һаны арта бара.

# ЗАМАНСА ОҪТАХАНАЛАР АСЫЛА



**Уҡыу йылы аҙағына тиклем Башҡортостан колледждарында 12 заманса оҫтахана асыласаҡ.**

Был турала 2022-2026 йылдарҙа республикала урта һөнәри белем биреүҙе үҫтереү стратегияһына арналған Хөкүмәт ултырышында Премьер-министр Андрей Назаров белдерҙе. "Урта һөнәри белем биреү системаһының әһәмиәте федераль кимәлдә арта һәм уны үҫтереүгә ил Президенты ҙур иғтибар бүлә. Бөгөн "Мәғариф" милли проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә лә был өлкәгә оло ярҙам күрһәтелә. Башҡортостанда өс йыл эсендә был маҡсатҡа 515 млн һум федераль субсидиялар йәлеп ителгән", - тине Премьер-министр. Шулай уҡ һуңғы осорҙа колледждарҙың матди-техник нигеҙҙәрен яңыртыу өсөн дә бик күп көс һалыныуын телгә алды. Был эш Рәсәй Мәғариф министрлығы тарафынан булдырылған 2030 йылға тиклем эшсе кадрҙар әҙерләү һәм һөнәри квалификацияларҙы формалаштырыу системаһын үҫтереү стратегияһын Башҡортостанда бойомға ашырыу сиктәрендә алып барыласаҡ. Республикала Урта һөнәри белем биреүҙең үҫеш стратегияһы өс этаптан торасаҡ. Премьер-министр Андрей Назаров Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары проектын хупларға тәҡдим итеп, республиканың Мәғариф һәм Һаулыҡ министрлыҡтарына ҡараған колледждар менән эште яйға һалырға, йыл аҙағына тиклем 12-нән артыҡ заманса оҫтахана асыуҙы тәьмин итергә ҡушты.

# МӘКТӘПТӘР ӨСӨН МОТЛАҠ



**Дәүләт Думаһы "оҙайтылған көн төркөмө" эшен көйләү тураһында федераль закон проектын ҡарай башланы, тип хәбәр итте Рәсәй парламенты спикеры Вячеслав Володин.**

Хәҙерге ваҡытта мәктәптәрҙең өстән бер өлөшөндә генә оҙайтылған көн төркөмдәре бар, тип билдәләне Володин. Уларҙы асыу һәм ойоштороу тәртибе тураһында ҡарар һаман да белем биреү учреждениелары ҡарамағында ҡала. "Федераль нормаларҙың мәктәптәрҙә оҙайтылған көн төркөмдәрен булдырыуҙы гарантиялауы мөһим. Был мәсьәләне ата-әсәләр һәм уҡытыусылар менән тикшерергә кәрәк", - тип өҫтәне спикер. Яңы закон проектына ярашлы, белем биреү ойошмаһы оҙайтылған көн төркөмдәрен асыу тураһында ҡарарҙы ата-әсәләрҙең фекерен иҫәпкә алып ҡабул итергә тейеш. Бынан тыш, бындай төркөмдәрҙә балаларҙы ҡарау һәм тәрбиәләү менән бер рәттән, дәрескә әҙерләнеү, түңәрәктәр, секциялар, мәҙәни һәм башҡа саралар үткәреү зарур. "Әгәр закон ҡабул ителһә, оҙайтылған көн төркөмдәре белем биреү процесының бер өлөшөнә әүерелә. Ата-әсә түләүен кәметеү өсөн төбәктәрҙең оҙайтылған көн төркөмдәрен өҫтәмә финанслауға хоҡуғы билдәләнә. Был мәсьәлә буйынса башҡараһы эштәр байтаҡ", - тине Вячеслав Володин.

# ЯҢЫ ҮҘГӘРЕШТӘР

**Федераль педагогик үлсәүҙәр институты БДИ - 2023 өсөн эштәр әҙерләй башланы. Быйыл һынау тәүгә 11 йыл элек ҡабул ителгән стандарттар буйынса уҙғарылғайны. Ә уларҙа бөтөнләй башҡа алымдар ҡулланыла.**

Төп мәсьәлә булып миҫалдарҙы, формулаларҙы белеү генә түгел, ә уларҙы ғәмәлдә ҡулланыу тора. Мәктәптең баланы мәғлүмәтте анализларға, системаға һалырға, һайлап алырға һәм мәғлүмәттәрҙән комбинация эшләргә, улар нигеҙендә һығымта яһарға өйрәтергә тейешлегенә баҫым яһаласаҡ. 2021 йылда БДИ-ның контроль-үлсәү материалдарына билдәле бер үҙгәрештәр индерелгәйне инде: практик оҫталыҡҡа баҫым яһалды, һәр предметта 4-тән 6-ға тиклем эш яңыртылды.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл төп осорҙа Рәсәй буйынса Берҙәм дәүләт имтиханында бөтәһе 690 меңдән ашыу кеше ҡатнашты, уларҙың 6,5 меңдән ашыуы имтиханда 100 балл алды. Уларҙан 381 кеше ике фәндән 100-әр балл йыйған. 16 бала 300-әр балл алды. Йәмғиәтте өйрәнеү фәне нисәнсе йыл инде иң күп кеше ҡатнашҡан имтихан булып ҡала, информатиканы ла һайлаусылар күбәйә башлаған. Быйылғы йылда физиканы уҙып китеп, һайлау буйынса фәндәр араһында өсөнсө урынға сыҡҡан, 100 меңдән ашыу сығарылыш уҡыусыһы тап информатиканы һайлаған. Ә яңы үҙгәрештәр 1 сентябргә тиклем иғлан ителәсәк.

# БИНА ЯҢЫРА




**Өфөләге 115-се гимназияның асылыуына быйыл 55 йыл була. Ошо уңайҙан, яңыртылғандан һуң, уны йыл аҙағында - декабрҙә асыу күҙаллана.**

"Күләмле төҙөкләндереүҙе 2021 йылдың декабрендә башлағайныҡ. Спорт залы һәм ашхана булған бер ҡатлы блоктар һүтелде. Уларҙың урынына яңы уҡыу корпусы - элекке өс ҡатлы бинаға төкәтмә төҙөлә. Төҙөкләндерелгәндән һуң гимназияның дөйөм майҙаны 4,1 мең квадрат метрҙан 18 мең квадрат метрға тиклем артасаҡ, белем усағы 1225 балаға иҫәпләнгән. Ә дөйөм алғанда, Өфөлә хәл ошолайыраҡ: Өфөнөң Ленин районындағы Затон - Көнсығыш биҫтәһендә 1225 урынлыҡ мәктәп төҙөйбөҙ. Уны 2023 йылда тамамларға йыйынабыҙ. Бынан тыш, быйыл тағы ла бер мәктәп төҙөй башларға планлаштырабыҙ. Ул Кузнецов Затонында буласаҡ, 2200 урынға иҫәпләнгән", - тип яҙа социаль селтәрҙәрҙә республика Башлығы Радий Хәбиров.

**✓ Бәхетле итер өсөн һуңғы көнгә ҡәҙәр һуҙмайҙар, һуңғы һаламға ла йәбешмәйҙәр, һин ышанған Гәзинур мәктәп йылдарында тороп ҡалды. Ә бөгөнгө-һө һине тик яңғыҙлыҡҡа ғына этәрә. Арағыҙҙа вуздан һуң да ете йыл ваҡыт ята.**



* * *

Туй шау-шыуы баҫылды. Шунда ғына Камила һөйгәне Гәзинур тураһында дөрөҫләктө ишетте. Шаңҡытты уны был хәбәр. Гәзинурҙың ҡаты ауырыған ҡатыны бер ай самаһы элек гүр эйәһе булып ҡалған. Быға тиклем ҡайта алмауы ла шул хәл менән бәйләнгән икән. Юҡ, йәрен тартып алғанға Камила бер ҡасан да Гүзәлгә үлем теләгәне булманы. Тыуым-үлем тәҡдирҙән. Ул, хатта ки, йән һөйгәнен һалдырып ала алған әҙәмде әрһеҙ генә түгел, үтә лә сәләмәт тип уйлай ине. Хәҙер килеп Гәзинурҙың буйҙаҡ ҡалыуы ла уға яҡтылыҡ, бәхет килтермәне. Был турала ни өсөн бер кем дә бер нәмә лә әйтмәне? Ни өсөн йәшергәндәр? Гәзинур бит фәҡәт унын өсөн генә ҡайтҡан булған! Камиланың әсәһе тыйған, күҙ йәштәре аша ялбарған, талап иткән... Эх, уҡталғайны ла баһа Гәзинур әйтергә... Камила үҙе туҡтатты. Кәрәк саҡта ниңә уның күнеле һуҡыр ҡала икән? Һиҙенмәне бит, исмаһам, саҡ ҡына ла!.. Хәҙер уның йән һөйгәне япа-яңғыҙ. Янында йыуатыусыһы ла, йылы һүҙ әйтеүсеһе лә юҡ. Нимәгә өмөт тотоп йәшәй икән әлеге мәлдә? Гәзинурҙы йәлләүҙән Камиланың йөрәге һыҙҙы. Ҡайғыға тарығанда яңғыҙ ҡалыуҙың нимә икәнен Камила яҡшы белә. Гәзинурҙы тыңлап бөтмәйенсә, сығарып ебәргән икән, уның да гәйебе ҙур, сөнки үҙ хәстәрен өҫтөн ҡуйҙы.

- Ни өсөн дөрөҫөн әйтмәнегеҙ! - тип ярһыны Камила.

- Бөтәһен дә мин тыйҙым, - тине әсәһе һәр һүҙенә баҫым яһап.

- Ни хаҡың бар ине Гәзинурҙы тыйырға? Ул бит тик минең өсөн ҡайтҡан булған! Инде бер ниндәй ҙә кәртәләр ҡалмаған саҡта!..

- Хаҡым бар, балам. Бәхетле итер өсөн һуңғы көнгә ҡәҙәр һуҙмайҙар, һуңғы һаламға ла йәбешмәйҙәр, һин ышанған Гәзинур мәктәп йылдарында тороп ҡалды. Ә бөгөнгөһө һине тик яңғыҙлыҡҡа ғына этәрә. Арағыҙҙа вуздан һуң да ете йыл ваҡыт ята. Уны һеҙ айырым үттегеҙ. Әле тап иткән кешең - һинең өлөшөң. Ҡайҙа төшкәнһең, шунда бат!

* * *

Тормош әкрен генә үҙ яйы менән дауам итте. Дөрөҫ, Камиланың иненә хужалыҡ хәстәрлеге өҫтәлде. Исхаҡтың дөртләнеп донъя көтөүе ҡыуаныс. Шулай ҙа ғаиләлә иң бәхетлеһе Зөлфирәләр. Хәҙер уның һәр шатлығы - Камиланыҡы. Ғаиләһенән ҡәнәғәт ул: иң егәрле ир-егеттә кейәүҙә, бер-береһен ярты һүҙҙән үк аңлап торалар. Тормош көтөү өсөн шулар кәрәк. Тик күңелен юҡ-юҡта бер үк һорауҙар өйкәй башлай. Гәзинур менән яҡшылап һөйләшә алмайынса айырылышһыҡлар... Башҡалар ҡыҙылмаған булһа, бәлки... Бәлки... Шулай ти ҙә Камила уйға ҡала. Ә уйҙың осо ла, ҡырыйы ла юҡ. Нимә эшләй әлеге мәлдә Гәзинур? Кем уның хәлен аңлай, йыуата? Ниндәй ут йота? Аҙ ғына көтмәне, тип уны ҡәһәрләмәйме? Һағынамы икән уны? Онотманымы? "Мин һине ғүмерем буйы көтәсәкмен", тигәйне Камила йән һөйгәненә. Юҡ, һүҙҙәр менән уйнағаны булманы, мәгәр ауыҙҙы үлсәп асырға кәрәк икән. Күҙ алдына башын аҫҡа эйгән килеш унан алыҫлаша барған Гәзинур килеп баҫты. Үкендергән, йөрәкте һыҙлатҡан хушлашыу. Түҙмәне Камила, Яңы йыл алдынан байрам менән ҡотлап открытка ебәрҙе.

* * *

Камила мәктәптән һуң ғына сыҡты, шул саҡ ҡаршыһында Гәзинур баҫып торғанын күреп, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанманы. Бер аҙ теклә-шеп торғандан һуң, беренсе булып Гәзинур телгә килде.

- Камила, асыуланмайһыңмы?

Ҡатын күҙҙәрен селт-селт йомдо, ауыҙын бер асты, бер япты, ахырҙа йылмайҙы. "Юҡ" тигәнде белдереп, баш сайҡаны. Теклә-шкән килеш йәнә лә һүҙһеҙ ҡалдылар.

- Камила, әйҙә, йөрөп киләйек.

Бер аҙ бара биргәс, Гәзинур ялт итеп ҡатындың ҡаршыһына баҫты.

- Камила, - тине ул өҙөп. - Әйҙә, ситкә сығып китәйек.

Камила был һүҙҙәрҙән тертләне.

- Ситкә? Хәҙер?..

- Бөгөн үк.

- Гәзинур, минең өҫтә яуаплылыҡ. Башҡа кешеләрҙең яҙмышы! Ә бит күпме көттөм ошо һүҙеңде!.. Хәҙер ҡул һелтәп сығып китер замандар үтте.

- Мөхәббәт ҡалды.

- Мөхәббәтем... - Камила һағыш, үкенес тулы күҙен Гәзинурға төбәне. - Минең мөхәббәтем хәҙер килеп бөтөндәргә ҡайғы, күҙ йәше булып төшөргә тейешме ни?

- Тағы ла үҙеңде ҡорбан итергә әҙерһең...

Был һүҙҙәр һиҫкәндерҙе Камиланы. Ул уйсан ҡарашын ҡайҙалыр алыҫҡа төбәне.

- Мин яуап бирермен һиңә... Тик әле түгел.

- Иртәгә лә киләм!..

Камила өйөнөң ишеген тартты. Ишек еңел генә асылды. Ҡара-ҡара, Исхаҡ йүнәтеп ҡуйған бит! Асыуы ауыр тип, бер генә әйткәйне. Бына шулай, донъя көтәбеҙ, тип, мәж киләләр инде... Үҙ йорто, үҙ донъяһы бар хәҙер Камиланың. Өйө йылы, яҡты. Уны һағынып көткән Исхаҡтың күҙҙәре бөтәһенән дә яҡтыраҡ. Осҡонланып йылылыҡ бөркөүсе күҙҙәр... Камила килеп ингәндә Исхаҡ өҫтәл артында низер яҙып ултыра ине. Ире ҡапыл башын күтәрҙе, Исхаҡтың ҡарашы яҡшы таныш Камилаға, тимәк, кем менән осрашҡанын белә. Был ҡараш ҡатынды көйҙөрөп алғандай итте. Камила, тыныс күренергә тырышып, ашыҡмай ғына әйтте:

- Ул килде. Беҙ һөйләшеп йөрөнөк.

- Аңлайым. Тик ни өсөн ул минең ҡатын менән ситтә осраша?

Камиланың йөрәге урынынан ҡупты:

- Теге ваҡытта ла килгәйне бит. Һин ҡаршы булманың.

- Ул саҡта әле һин минең ҡатыным түгел инең. Яҡшы кеше минең өйөмә килһен. Ҡунаҡ булыр.

- Ләкин беҙҙең арала бер нәмә лә булманы!

Исхаҡ яуап ҡайтарманы, ә быны күҙҙәре әстә ниндәй ут ҡайнағанын асыҡ һөйләй ине. Ул әйелде лә ашығып нимәләр яҙырға кереште.

- Исхаҡ, - тине Камила шул саҡ. - Әгәр ҙә китергә теләйем икән, мине берәү ҙә тота алмай.

Ни өсөн өндәшмәй һуң ул?

- Мин китәм, - тине Камила.

- Кит, - тине шул саҡ Исхаҡ башын ҡалҡытып, үҙе ҡалтыраған тауышын баҫырға тырышты. - Һөйөүҙе кеслек менән яулап булмай икән, йәлләгән өсөн генә тормошҡа сыҡмайҙар, Камила. "Йәлләгәндәрҙе" ныҙырыҡ ғазапҡа дусар итеүең ихтимал.

Камила торҙо ла әйберҙәрен барлай башланы. Шул саҡ икенсе бүлмәнән Зөлфирә йүгереп килеп сыҡты.

- Әсәй, һин китәһеңме ни?

- Юҡ, китмәйем, - ул балаһы һөйҙө лә йәнә әйберҙәренә тотондо.

- Әсәй, һин дә үләһеңме инде?

Ҡыҙыҡай килеп Камиланың муйынына аҫылынды. Йөрәге өҙөлгәндәй булды. Зөлфирәне күтәреп үк алды.

- Китмәйем мин бер ҡайҙа ла, ҡыҙым, - унан Исхаҡҡа табан боролдо. - Китә алмайым!

Зөлфирә үҙенең битен Камиланыҡына терәне:

- Мин һине ныҡ итеп ҡосаҡлайым!

Камила йәшле күҙен ҡыҙға төбәп шыбырланы.

- Мин дә һине ныҡ-ныҡ итеп ҡосаҡлайым...

Исхаҡ ҡулындағы ручкаһын атып бәрҙе, һүнгән күҙҙәре ҡапыл тоҡанды.

- Мин һеҙҙең икегеҙҙе лә үлтергәнсе ҡыҫып ҡосаҡлайым!..

Ул ҡатынын да, ҡыҙын да бергә күтәреп алды.

- Ай-ай!.. Ҡосағың ҡалай киң!..

- Мин хәҙер бөтә Ер шарын ҡосағыма һыйҙырам!

Ҡара-ҡара, ҡалай яҡын, ҡәҙерле икән дә баһа был тауыш! Әйтерһең, Камиланың күңеленән ауыр бер таш төшөп китте...

Гәзинур менән хушлашырға Камила Исхаҡ менән барҙы. Дөрөҫ, ире улар һөйләшкәндә ишетмәне, ситтә торҙо. Ҡамасауларға теләмәне.

- Ғаилә ҡормаҫ борон мин үҙем дә аңлап бөтмәгәнмен. Төҙөгәндә емереү еңел түгел икән. Хәҙер минең үҙемдең дә мөйөшөм бар. Маҡсатым бар. Балаларым хаҡына... Әйе, Гәзинур, Исхаҡтан минең балам буласаҡ. Бына бит, өмөтһеҙлектә, икеләнеү һәм бушлыҡты еңеп, үҙ донъямды ҡора алдым, һин дә өр-яңы тормош башларһың, сөнки бөтә ғүмерең алда. Нимә ул ир-егет өсөн утыҙ йыл ғүмер? Фәндә яһаған уңыштарың да юҡ түгел, ул йәһәттән һин иҫ киткес ынтылышлы кеше. Ҡасандыр һине осратҡаным өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен. Йылдарымды ғына түгел, көндәремде лә байытҡаның өсөн... Юҡ, Гәзинур, өндәшмә!.. Был һүҙҙәрҙе мин ҡасан да булһа әйтергә тейеш инем. Гәзинур, ҡал минең мәңгелек яҙым - йәшлек мөхәббәтем булып, һәм бәхетле бул!

**(Дауамы. Башы 27-32-сы һандарҙа).**




## АҠҺАҠАЛ ҺҮҘЕ



## АҠЫЛДЫҢ ҮҘЕ БЫЛАР

● Елде епкә бәйләп булмай, эшкә егеп була.

● Һайлап ашауҙан, тәмләп ашау хәйерлерәк.

● Бәхет - ике күңелһеҙлек араһындағы ваҡыт.

● Ҡолаҡтар ҡарпайған һайын, тел көрмәлһен.

● Изгелектән башҡа бер нәмә лә мәңгелек түгел.

● Иң булдыҡһыҙ кеше - иң талапсан тәнҡитсе.

● Күҙ йәштәре менән сыҡмаған хәсрәт йәнде иҙә.

● Яттың үпкәнен көткәнсе, дуҫтың үпкәһен күтәр.

● Ерҙең йылыһын яланаяҡ йөрөгәндәр генә һиҙә.

● Һәр мәшәҡәт көс һалып көрәшеүгә лайыҡ түгел.

● Эш күпте белеүҙә түгел, кәрәген эшләй белеүҙә.

● Тыуған ерҙең һаҡсыһы, ата-әсәңдең ялсыһы бул.

● Бер ҡараштан яҡлар булһаң, башҡаларын да бел.

● Йән ҡыйып йыйған мал-мөлкәт тә ерҙә ятып ҡала.

● Таштары ишелеп бөткәндә лә, ҡая исемен һаҡлай.

● Үҙ шөғөлөн тапҡан арымай эшләй, ҡәнәғәт йәшәй.

● Бер аҙымын булһа ла алдан уйлап яһаған кеше уңа.

● Уфтаныуҙан ул тыумаҫ, ҡыҫталыуҙан ҡыҙ тыумаҫ.

● Умырып тешләгәндән, уйлап эшләгән уңышлыраҡ.

● Сәйнәп йотҡандан семтеп ҡапҡан татлыраҡ күренә.

● Үткәндәге яҡшыны яҡла, бөгөнгө яҡшыға ярҙам ит.

● Йәшәүҙән ҡәнәғәтләнеү тапмаған күңел уты тиҙ һүрелә.

● Тик ятҡан тимер тутлана, тик ятҡан ирҙәр ваҡлана.

● Бер етемде аҫрау биш тапҡыр намаҙға баҫыуға тиң.

● Ҡарашың өҫтән булғанда ла, башыңды күккә сөймә.

● Кешенең ғүмерендә әйткәне үҙе үлгәс ысынға әйләнә.

● Тауҙан тәгәрәгән һәр таш артынан бесәй ҙә йүгермәҫ.

● Кемдер йәшәү урынына йәшәү бурыгын ғына атҡара.

● Һәр файҙалы эш һәм игелекле ғәмәл маҡтауға лайыҡ.

● Сират күперендә хөкөм ҡылысы барыһын да тигеҙләй.

● Ғүмерҙә йүнһеҙ булһаң, шаулаң ҡалыр, йөҙөң булмаҫ.

● Милләтеңә тоғро кеше халҡының данлы тарихын белә.

● Хакимдың ҡеүәте бойороуҙа, әҙәмдең ҡөҙрәте белемдә.

● Үҙәне киң йылға тын аға, күңеле киң кеше тыныс йәшәй.

● Ғүмер уҙа ҡыҙыу, йылдам. Башлап булмай ҡыҙыл юлдан.

● Заманыма тауышым - оран, ауыҙым - ян, телем - уҡ булһа ине.

● Ижад бәхете - атаҡлы булыуҙа ғына түгел, һәләтеңде танып, баһалай белеүселәр булыуҙа.

**Урал МОСТАФИН.**

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



## ҺИМЕҘЛЕК - НӘҪЕЛДӘН

■ Артыҡ ауырлыҡ, ғәҙәттә, атайҙан улға, әсәйҙән ҡыҙға нәҫел буйынса бирелә икән. Был турала АҠШ-тың Плимут медицина мәктәбе хәбәр итә. Улар 226 Америка ғаиләһен тикшереп, тулы кәүҙәле әсәйҙәрҙең ҡыҙҙары артыҡ ауырлыҡ менән йышыраҡ яфа сигеүен асыҡлаған. Артыҡ ауырлыҡ малайҙарға атайҙарҙан күсә. Артыҡ ауырлыҡтың тәүге билдәләре бала саҡта уҡ күренә башлай, мәҫәлән, һигеҙ йәшлек ҡыҙҙар тиҫтерҙәренә ҡарағанда тулыраҡ була.

■ Йоҡлауҙың иң мөһим маҡсаты булып энергияны һаҡлау, ваҡытты һәм көстө дөрөҫ ҡулланыу тора, тип белдерә Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимы Джером Сигель. Баҡтиһәң, йоҡлаған саҡта организмдың иң күп энергия тотоноусы ағзалары һүнеп тора икән. Мәҫәлән, мейе дөйөм кәүҙә массаһының 2 процентын ғына алып тора, әммә 20 процент энергия тотона. Шуға ла организмға көнөнә 6 тапҡыр туҡлыҡлы итеп ашағансы, уны 8-10 сәғәткә һүндереп тороу күпкә файҙалыраҡ. Ә ҡышҡыһын йоҡоға талыусы йәнлектәр һаҡлап ҡалған энергия уларға йылыраҡ яҡтарға барып етергә лә етә, имеш.

■ Кешенең тәбиғәте менән оптимист булыуын АҠШ-тың Канзас штаты Университеты асыҡлаған. Был тикшеренеүҙә донъяның 140 илендә йәшәүсе халыҡ ҡатнаша. Яуап биреүселәрҙең 95 проценты тик ыңғай ваҡиғалар көтөп йәшәй һәм был, ғалимдар фекеренсә, "универсаль оптимизм теорияһы"н тағы ла бер раҫлай. Был теория буйынса, һәр кеше алдағы көндәргә ышаныс менән ҡарай.

■ Яҡшы кәйеф һыуыҡ тейеүҙән һаҡлай. Дуҫтарың менән күңел асҡан, яратҡан эшең менән шөғөлләнгән, башкөлләй эшкә сумған саҡта һин үҙеңдең иммун системаңды ике көнгә етерлек итеп нығытаһың. Ә насар кәйефтән һуң иммунитет ике тәүлеккә ҡаҡшай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һау кеше насар кәйефтә урамға сыҡһа, шунда уҡ һыуыҡ тейҙереп, ауырып китә ала.

■ Йөрәк ауырыуҙарынан, шул иҫәптән, инсульттан һаҡланам тиһәгеҙ, өйҙә ултырмағыҙ, ә күберәк сәйәхәт итегеҙ. Канаданың Торонто университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, ғүмере буйы бер ҡалала ғына йәшәүселәргә ҡарағанда, йәшәү урынын алыштырырға яратыусылар араһында инсульт кисереүселәр 30 процентҡа һирәгерәк осрай. Сәйәхәт яратыусылар ҙа йөрәк сирҙәренә бирешеп бармай икән.

■ Табип-психиатр, Лос-Анджелес университеты профессоры Роджер Джеломми кәңәш итеүенсә, бер минут ултырып торорға ла ваҡытығыҙ юҡ икән, эшләргә тейешле эштәрегеҙҙән исемлек төҙөгөҙ һәм уны яртыһына тиклем ҡыҫҡартығыҙ. Психологтар шулай уҡ арып киткәнлекте тойоу менән кисен телевизорҙан яңылыҡтар урынына тәмле итеп ашарға бешерергә өйрәтеүсе тапшырыуҙар ҡарарға ҡуша. Былдай "дауа"ны бер аҙна тирәһе ҡулланһағыҙ, күңелегеҙҙә йәшәүгә дәрт уянып китеүен үҙегеҙ ҙә һиҙерһегеҙ. Калифорнияның Беркли университетының тикшеренеүҙәр үҙәге директоры Америк Азеведо фекеренсә, кеше үҙен замандың һәр бер яңы техникаһы менән уратып алырға тырыша, шуға ла ҡайһы бер саҡта машинаһыҙ, телефонһыҙ, музыка тыңламай ғына йәйәүләп йөрөп алыу ҙа арыу тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә.

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# ХУЖАБИКӘЛӘРҘЕҢ...

## урағай мәшәҡәттәре

**Август - йәйҙең һуңғы айы. Башҡорттарҙа ул урағай тип йөрөтөлә. Сөнки нәҡ ошо осорҙа игенселәр ураҡҡа төшә, баҡса уңыштары йыйып алына, ҡышҡылыҡҡа көҙбайлыҡ әҙерләнә башлай. Августа аяҙ булһа, көндөҙ ҡыҙҙырып, төндәрен һалҡынайта, көҙ һулышы һиҙелә башлай. Ай аҙаҡтарында, йылына ҡарап, ҡырау төшөүе лә ихтимал. Баҡсаларҙа ҡыяр, помидор өлгөрә, сейә, крыжовник, алмалар бешә. Был ваҡытта еләк үҫентеләрен ултыртыу ҙа килешә, киләһе йылға уңыш бирәсәк. Ҡырҙа иһә әлморон, балан, миләш ҡыҙара, муйыл да тәмләнә. Ямғырлы көндәрҙә иһә бәшмәктәр ҡалҡып сыға. Йәйҙең һуңғы айы булһа ла, күҙҙе ҡамаштырырлыҡ сағыу сәскәләре менән дә йәмле урағай. Мул миҙгелдә уңған хужабикәләргә эш икеләтә арта. Йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра тигәндәре шул - ҡышҡылыҡҡа ҡайнатмалар, салаттар әҙерләнә, йәшелсә тоҙлана. Үҙҙәрен тыңлайыҡ.**

### "Үҙең үҫтергән ҡарбуз татлыраҡ"

Моҡас ауылында йәшәгән **Гөлназ Муллабаева** быйыл йылдың һалҡынса һәм һуңыраҡ килеүенә ҡарамаҫтан, баҡсаһында ҡарбуз үҫтерә.

- Алдан үрсетмә ултыртмайым, быйыл май айында тура ергә сәстем. Йыл да орлоғон алып ҡалам. Ҡоро, эҫе һаваны ятаһа ла, быйыл да, ямғырлы йыл булыуына ҡарамаҫтан, һәйбәт кенә үҫеп китте. Үҙең үҫтергән ҡарбуз-ҡауынды тәмләүе лә күңелле. Ныҡ ҙур булмаһа ла, татлы була. Таҙа ерҙә, ашламаһыҙ үҫтерелгәс, ҡабығын да файҙаланырға мөмкин. Ҡабығын шаҡмаҡлап турағас, ҡайнар һыуҙа бешереп алабыҙ ҙа, 10 сәғәткә шәкәр сиробына һалып ҡуябыҙ, тағы бер ҡат бешереп алабыҙ.

Сироп былай әҙерләнә: кило ярым шәкәрҙе 4 стакан һыуҙа иретәбеҙ. Бешеп килгәндә бер балғалаҡ лимон кислотаһы һәм бысаҡ осонда ғына ванилин өҫтәйбеҙ. Эҫе ҡарбуз ҡабыҡтарын киң һауытҡа бушатабыҙ, шәрбәте ағып бөткәнен көтәбеҙ һәм өҫтөнә тағы шәкәр ҡомо һибәбеҙ. Ҡабыҡтар кипкәс, быяла банкала йә ҡағыҙ пакетта һаҡлайбыҙ, - ти уңған хужабикә.

### Крыжовниктан "Мохито" компоты

Мораҡ ауылынан **Эльвира Кинйәбулатова** ла йәй ҡәҙерен белә. Ишек алды тулы аллы-гөллө сәскәләр булһа, баҡсаһы йәшелсә-емешкә бай. Гәзит уҡыусыларға ул крыжовниктан эшләнгән "Мохито" компоты рецебын тәҡдим итәбеҙ.

3 литрлыҡ компот ябыу өсөн 350 г крыжовник, 1 стакан шәкәр ҡомо, 2 лимон киҫәге, 2-3 бөтнөк һабағы кәрәк. Емеште таҙалап йыуғас, самалап банкаға тултырабыҙ, бөтнөк, лимон киҫәген һалабыҙ ҙа ҡайнар һыу ҡоябыҙ. Өҫтөн таҙа ҡапҡас менән ҡаплап, 15-20 минут тирәһе ултыртып торабыҙ. Һыуынғас, тағы берҙе ҡайнатып, 1 стакан шәкәр өҫтәп, нығытып ябабыҙ. Бер-ике көндән тәмле компот әҙер ҙә була.

Августа йәшелсәләр һаман да үҫә әле. Ай аҙаҡтарына ҡыяр, помидорҙар, ҡабаҡтарҙы йыйып, тоҙлай, салат эшләй торған осор етә. Һуғанды ла ошо ваҡытта йолҡоп һалып киптерәләр. Көн торошона иғтибарлы булығыҙ, ямғыр яуып, уңышты юҡҡа сығармаһын. Көн яуынлы торғанда иһә баҡса еләген күсереп ултыртырға мөмкин. Сәскәләрҙән люпин, дельфиниум, мальва, лилиәләрҙе август аҙағында бүлергә, күбәйтергә була. Тюльпандарҙы ла ошо ваҡытта ҡаҙып алып, көҙ икенсе ергә күсерәләр. Һуғанлы сәскәләрҙең өс йылға бер тапҡыр булһа ла урынын ал-



маштырыу яҡшы. Юғиһә, сәскә атмай, һуған юғала башлай.

### Сәриә апайҙан ҡабаҡ салаты

Тәүәкән ауылының "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе **Сәриә апай Ғәлиева** ла баҡса эштәрен ярата. Тәртип тупһанан башлана, тигәндәй, уның өйөнә ҡарап, матурлыҡ тупһанан башлана тиергә була. Баҡса, ер эшенә булған һөйөү бала саҡтан һалыналыр, ти ул. Ысынлап та, бал ҡортондай егәрле ул. Баҡсаһында сейәһе лә, ҡарағаты ла, алмаһы ла, еҙәй кеүек емеш ҡыуаҡтары ла, муйылы ла, крыжовнигы ла, сортлы еләктәре лә мул уңыш бирә. Йорт, баҡса эштәрендә генә түгел, йәмғиәттә лә әүҙем, төрлө мәҙәни сараларҙа ҡатнаша, ауылдың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын уңышлы етәкләп килә Сәриә апай.

- Әле ҡабаҡтарҙың өлгөргән мәле. Бына ошо ябай ғына йәшелсәнән еңел генә эшләнә торған тәмле салат рецебын тәҡдим итәм. 3 кг ҡабаҡҡа, 1 кг әсе борос, ярты кило кишер, шул самалай томат пастаһы, 1 ҡалаҡ тоҙ, 5 ҡалаҡ шәкәр, 200 гр тәмле майонез кәрәк. Ҡабаҡты әрсеп, орлоғонан таҙартабыҙ, кишерҙе лә матурлап йыуабыҙ, боростоң да орлоҡтарын алабыҙ. Бөтә йәшелсәләрҙе ит турағыстан үткәрәбеҙ. Тоҙ, шәкәр һалып ҡайнатабыҙ ҙа томат пастаһы менән майонез өҫтәп, тағы бер ярты сәғәт тирәһе бешерәбеҙ. Әҙер булғас, стерилләнгән банкаларға һалып, ҡапҡас менән нығытып ябабыҙ. Һыуынғансы түңкәреп тороп, һыуытҡыста йә баҙҙа һаҡлайҙар. Бик тәмле килеп сыға, эшләп ҡарағыҙ. Ҡышҡыһын картуф иҙмәһе эргәһенә лә, макарон-спагетти менән дә, ҡарабойҙай менән дә ашарға була. Быйылғы йәй бигерәк матур, ямғыры ла ваҡытында яуҙы, баҡса уңыштарын да ваҡытында йыйып алып, бәрәкәтен күрергә яҙһын барыбыҙға ла, Хоҙай биргән ниғмәтте эш итәйек, хужабикәләр! - ти Сәриә апай.

### Ҡыҙыл рауза, һары лимон һәм ананас

Мораҡ ауылында йәшәгән иң әүҙем "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаһы **Зифа инәй Баймәнова** тәҙрә төбөндә йылы яҡ емештәрен оҫта үҫтерә. Яҙғыһын тумалаған лимон бөгөн һап-һары ғына булып бешеп тә еткән. Унан башҡа инәй өйөндә ананас та үҫтерә.

- Йылы яҡ үҫемлектәренә минең һөйөү көслө. Ананасты магазиндан һатып алып, башын бер иләләй генә ҡырҡып, бөтә һутын һығып (аҡ ҡына сүстәр ҡалырға тейеш), тупраҡҡа ныҡ күммәй генә ултырттым. Өс йыл үҫте. Өс йылдан һуң 1 литр һыуға бер семтем карбит ебетеп һиптем. Үҫеп китте, емешләнде. Ҡасан өлгөрөп етер, ҡарарбыҙ, - ти Зифа инәй.

Әйткәндәй, ағинәй рауза, лилиә сәскәләрен дә яратып үҫтерә. Өй алдында ғына ҡып-ҡыҙыл раузалары әллә ҡайҙан балҡып, күҙҙе ҡамаштыра.

Донъяны гөл иткән зат ул ҡатын-ҡыҙ. Матурлыҡ яратҡан, гүзәллек һөйгән апай-инәйҙәрҙең күп булыуы һоҡландыра.

### Баллы шөғөл - татлы шөғөл

Бикес ауылында йәшәгән **Вәлиевтар** өсөн дә йыл бәрәкәтле килә. Улар утыҙ йылдан ашыу ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә. Гөлгөнә апайҙың ҡартатаһы ла, атаһы Нуретдин олатай ҙа заманында атаҡлы ҡортсо булған. Вәлиевтарҙың умарталығы экологик таҙа ерҙә - Бикес менән Тәүәкән араһындағы Сыбартау итәгендә, йүкәлектә урынлашҡан.

- Йүкә сәскә атып бөтөп, балды айыртып алғас, ҡарабойҙай эҙләп китәбеҙ. Умарталарҙы баҫыуҙың үҙенә үк барып ултырабыҙ. Унан сират көнбағышҡа етә. Бик ҙур эш ул ҡортсолоҡ. Эш һатыуҙа ла, аҡсала ла түгел. Күңел ҡәнәғәтлеге бирә ул беҙгә. Беҙ ошо мөхиттә тыуғанбыҙ, үҙебеҙҙе белгәне бирле ошо мөхиттә үҫкәнбеҙ. Был - беҙҙең йәшәү рәүеше, - ти Вәлиевтар.

Гөлгөнә апай сәскә-гөлдәр ҙә яратып үҫтерә. Уның ишек алды, баҡсаһы, хатта тәҙрә төптәре һәр ваҡыт шау сәскә. Хатта исем-атамаларын да теүәлләп бөтөү мөмкин түгел ул үҫтергән гөлдәрҙең. Ҡул эштәренә лә маһир хужабикә. Ул бәйләгән ултырғыс, диван япмалары, селтәрҙәрҙе хатта заказ менән һораусылар күп. Рәсүл ағай ҙа алтын ҡуллы, ниндәй эшкә тотонһа ла булдыра. Бигерәк тә ағас эштәренә оҫта. Егәрле уҙаман ябай ғына ағас киҫәгенә "йән өрөп" тигәндәй, ҡупшы ғына әйбер ҙә эшләп ҡуя.

Хужабикә йыл да үлән сәйҙәре әҙерләй.

- Болануттың өлгөргән ваҡытын көтөп кенә торабыҙ, сәскәһен йыймайбыҙ. Сөнки бөтә шифаһы - япрағында. Бер аҙналыҡ эш инде. Алып ҡайттың да һалып киптерҙең түгел, уның серҙәре бик күп. Урын-еренә еткереп эшләйем тиһәң, бер аҙна ваҡыт кәрәк. Артыҡ күпләп эсеп тә булмай был сәйҙе, бер-ике аҙна эсәбеҙ ҙә ял итәбеҙ. Күстәнәскә биреп тә ебәрәм. Үлән сәйҙәре ҡышҡыһын айырыуса килешә. Мунсанан һуң йүкә балы ҡушып тороп эсеп ебәрһәң, шифа ғына инде, - ти Гөлгөнә апай.

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**
**Күгәрсен районы.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

**Үҙәк Американан картуф, кукуруз һәм табактан алда килгән был үсемлек беҙҙең илгә. Францияла уны тыштағы эскәмйәләр тирәләй матурлыҡ өсөн ултыртҡандар. Тәбиғәт шарттары ҡатыраҡ булған Германияла гөл урынына тәҙрә төптәрендә үстергәндәр. Англия һәм Рәсәйҙә оранжереяларҙа ғына үскән экзотик үсемлек булған. Ике быуаттан һуң Европанан кире Америкаға алып киленгән үсемлекте танымасы булмаған, бынан тыш, ул ағыулы иҫәпләнгән.**



# ПОМИДОР

1776 йылда Төньяҡ Америка колонияларының ирекле өсөн ҡаты көрәше барышында баш командующий Джордж Вашингтон алдына помидорҙар ҡушып ҡурылған бик тәмле еҫле ит килтереп ҡуйғанда, ул үҙен ағыуларға уйлауҙары хаҡында белмәй. Хаслыҡ ҡылыусы ашнаҡсы уңышҡа өлгәшеренә шикләнмәй һәм хатта инглиздәргә хәбәр ебәреп өлгөрә. Әммә осраҡлы рәүештә генә был хәбәр барып етмәй, оҙаҡ йылдар үткәс кенә йәшерен урындан табыла. Ә бына Американың буласаҡ президенты шул ваҡиғанан һуң томаттарҙы яратып ашай.

1811 йылдарҙа нәшер ителгән немец ботаника һүҙлегендә "Помидорҙар ағыулы иҫәпләнһә лә, Португалия һәм Богемияла уларҙан әскелтем тәмле соустар эшләйҙәр" тип яҙылған. Әммә үсемлектең йәшелсәһе түгел, ә һабаҡтары ағыулы икән - улар баҡса ҡороткостарына ҡаршы иң яҡшы үсемлек ағыуы булып иҫәпләнә. Бөгөн томаттың ниндәй генә төрҙәре юҡ һәм унан ниндәй генә тәмлекәстәр эшләнмәй.

Беҙҙе помидорҙың шифалы үҙенсәлектәре ҡыҙыҡһындыра. Әлбиттә, уларҙы ентекле өйрәнгәндәр һәм бик күп калий, каротин, төрлө витаминдар, аскорбин кислотаһы, пектин матдәләре, пуриндар, күҙәнәклек, магний, тимер, йод, азот матдәләре, алкалоидтар, лимон һәм алма кислоталары, никотин, ликопидин һәм башҡа химик ингридиенттар тапҡандар. Аҙҡанлылыҡтан яҡшы үҙләштерелгән тимер тоҙҙары ғына түгел, фолий кислотаһы ла мөһим булыуын беләбеҙ, ул, етмәһә, холестерин алышыныуын да көйләй.

Составында витаминдар һәм калий тоҙҙары булған помидор матдәләр алышыныуға һәм йөрәк-ҡан тамырҙарына бәйле ауырыуҙарҙы дауалағанда файҙалы. Ә пектин матдәләренең күплеге ҡанда холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итә. Томат һәм уның һуты ҡан баҫымын түбәнәйтеү көсөнә эйә, бәлки, шуғалыр ҙа күҙҙә ҡараһыу (глаукома) булғанда хәлде яҡшырта.

Халыҡ дауаһында помидор һәм уның һутын авитаминоз, матдәләр алышыныуы боҙолоуы, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы һәм ашҡаҙан-эсәк юлы, бауыр ауырыуҙарын дауалау, енес биҙҙәре эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн ҡулланалар. Яңы һығылған һут - ашҡаҙан һәм бөйән язваларын дауалауҙа иң һөҙөмтәле сара.

**Әлегә махсус дауаланыу ысулдары юҡ, шуға юғарыла һанап үтелгән ауырыуҙарҙан ошо рәүешле дауаланырға тәҡдим ителә:**

- Көнөнә 200-300 грамм яңы помидор ашарға.

- Яңы һығылған томат һутына бал ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

- Помидор йомшағын битлек сифатында 10-15 минут ҡулланырға.

Помидор ашауҙан тыйылыу кәңәш ителгән осраҡтар ҙа бар. Мәҫәлән, үт ҡыуығында таштар булғанда уны күп ҡулланырға ярамай, сөнки помидор үт бүлеп сығарыуҙы көсәйтә һәм был үҙ сиратында таштарҙың үт юлдарына кипсәлеп тороуына илтеүе бар. Әгәр ҙә таштар фосфат йәки оксалат сығышлы булһа, улар ҙурайыуы ихтимал.

Консерваланған, тоҙланған һәм маринадланған помидорҙарҙы бөйәр һәм йөрәк-ҡан-тамырҙары системаһы ауырыуҙары, шул иҫәптән гипертония ауырыуы булғанда ашау кәңәш ителмәй. Консерваланған ғына түгел, бешкән помидорҙар ҙа, бигерәк тә шәкәр һәм крахмал ҡушылған булһа, бөйәрҙә һәм бөҙөл ҡыуығында таштар барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә. Таштар бер төн эсендә барлыҡҡа килмәй, әлбиттә. Улар айҙар, йылдар дауамында үҫә.

Һаулығын нык ҡайғыртҡан кешеләр помидор йомортҡа, ит һәм балыҡ менән бергә "һыйыша алмауын" хәтерендә тоторға тейеш. Тағы ла "помидор осоронда" икмәк тураһында ла онотоп торорға тура килер. Был икмәк ашауҙан бөтөнләй баш тартыуҙы аңлатмай, ни бары икеһен ике ваҡытта ҡулланырға кәрәк. Ә бына томат һутын ашағандан ярты сәғәт үткәс эсеү файҙалыраҡ.

**Рим ӘХМӘДОВ китабынан.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР



**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тигән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмғиәт үсешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп яталыр?**

### Аяҡтар өсөн...

13 йәшлек немец уҡыусыһы Мориц Плетцинг аяҡтар өсөн компьютер төрткөһө уйлап таба.

Мориц яһаған был төрткөнө беҙ ҡулланған ғәҙәти төрткөгә өҫтәмә рәүештә ҡулланырға була. Сөнки уны файҙаланғанда ҡулды клавиатуранан алып тороу кәрәкмәй, шул арҡала компьютерҙа эшләү тиҙлеге лә арта. Иң мөһиме, аяҡ төрткөһө инвалидтар өсөн бик уңайлы. Мәктәп уҡыусыһының асышы йәш ғалимдар һәм уйлап табыусыларҙың 34-се күргәҙмәһендә күрһәтелде.

### Ҡыҙҙар ҙа бар

Уйлап табыусылар ир-егеттәр генә тип уйлай күрмәгеҙ. Маргарет Найт, мәҫәлән, иң күп патент алыусылар исемлегендә, заманында уны "итәк кейгән Эдиссон" тип тә атайҙар.

Маргарет - 19-сы быуаттағы иң күренекле уйлап табыусыларҙың береһе. Ҡағыҙ моҡсай, йөбештерә торған машина, асылмалы тәҙрә, йылытыу двигателе һәм башҡа тормош-көнкүреш өсөн кәрәк нәмәләрҙе уйлап тапҡан. Маргарет Найт 1838 йылдың февралендә Йорк ҡалаһында донъяға килә. Атаһынан иртә тороп ҡалған ҡыҙ ағайҙары менән кизе-мамыҡ комбинатында эшләй башлай. Ун ике йәшендә Маргарет тәүге асышын яһай. Бер эшсе станокта ҡулын имгәтә, был хәлдә ҡыҙ оҙаҡ ваҡыт онота алмай. Эшселәргә ярҙам итеү теләге менән яна. Уйлана, баш вата торғас, станокҡа ят әйбер килеп эләгеү менән эште туктата торған стопор уйлап таба. Был асышын заводта шундуҡ ҡулланышҡа индереп ебәрәләр. Артабан ғаилә икенсе ҡалаға күсенә, унда Маргарет ҡағыҙ моҡсай эшләү фабрикаһына бара. Бындағы эште оҙаҡ күҙәтеп йөрөгәс, башына яңы фекер килә. Маргарет яҫы төплө, бөкләнә торған моҡсай һәм уны тиҙ эшләй торған машинаны тәҡдим итә. Шуны ла әйтергә кәрәк, был моҡсайҙар бөгөнгө көндә лә киң ҡулланылышта. Ғөмүмән, барлыҡ аҙыҡ-түлек тоҡтары Маргарет нисек күрергә хыялланған, бөгөн шул сифатта сығарыла, улар экологик яҡтан иң хәүефһеҙ тип һанала. Маргарет Найт үҙ ғүмерендә төрлө йүнәлештә йөҙ асыш яһай. Шуларҙың егермеһенә патент ала. 1871 йылда Дәрәжәле легиондың Королева ордены кавалеры итеп алалар, королева Виктория уны үҙе бүләкләй. 2006 йылда уның исемен уйлап табыусыларҙың Милли дан залына индерҙеләр. Найт уйлап тапҡан күп нәмәләр Вашингтондағы Смитсон музейында һаҡлана.

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Ҡатын-ҡыҙҙың үҙбаһаһы

Ниндәйҙер кимәлдә ҡатын-ҡыҙ булыуы ауыр ул. Барыһы ла бала саҡтан, ҡыҙҙарҙы тәрбиәләүҙән башлана. Математика, техника һәм башҡа фәндәр тик ир-ат өсөн генә тип һанала һәм ҡатын-ҡыҙҙа баҙнатһыҙлыҡ тыуҙырыла. Шулай итеп тотҡарлыҡ һәм түбән үҙбаһа тыуа. Ҡыҙҙар мәктәптә уҡығанда уҡ тәбиғи фәндәр гүзәл зат өсөн дә асыҡ һәм баш әйләнерлек уңыш килтереүе мөмкин икәнлеген аңларға тейеш. Әгәр быға ваҡытында өйрәтмәгәндәр икән, улар үҙҙәрен ҡайтанан программалап, был өлкәләрҙә эшләүгә лә лайыҡлы икәнлектәрен күҙалларға тейеш.

● Минең енесем бер ниндәй ҙә етешһеҙлектәргә эйә түгел. ● Эш техник тәфсирҙән торһа ла, мин баш менән эшләргә һәләтле. ● Әгәр мин ошо өлкәлә эш башлаһам, бәхетле буласаҡмын.

Ҡатын-ҡыҙға бер ваҡытта ла үҙенең мөмкинлектәре һәм һәләттәре тураһындағы күҙаллауҙарын яңыртырға һуң түгел. Ыңғай өндәге-төш эш урынында ир-аттың эгоизмын һәм енси ниәттәрен еңеп сығырға туранан-тура ярҙам итә. Көсөргәнештән арынып, ыңғай күренештәрҙе күҙаллау - ир-аттың өҫтөнлөккә дәғүәһен еңеп сығыуҙы аңлата. Өндәге-төш ысынбарлыҡҡа әйләнә. Һеҙ, ҡатын-ҡыҙ, һәр саҡ үҙегеҙ лайыҡлы булған өлкәлә ихтирам яулай башларһығыҙ. Һеҙҙең тән телегеҙ, йөҙөгөҙ, тауышығыҙ ир-аттың залимлығына яҡшы яуап биреү буласаҡ.

● Минең уңыштарым бер нәмә менән дә сикләнмәгән. ● Минең ҡатын-ҡыҙ булыуым - етешһеҙлек түгел, ә өҫтөнлөк. ● Мин - Ижад итеүҙә баһалы ҡатнашыусы.

Әгәр һеҙ әсә икән, ҡыҙҙарығыҙҙың киләсәген еңеләйтә алаһығыҙ. Бынын өсөн улар менән үҙҙәренә ышаныс тыуҙырған әңгәмәләр үткәрергә, һәр саҡ дәртләндереп торорға кәрәк.

Ситтән генә берәй хеҙмәт урынына күҙ һалайыҡ. Унда ҡатын-ҡыҙ менән ир-ат - уның етәксеһе әңгәмәләшә. Ҡатын етәксеһенең һәр һүҙенә әҙәлеп-әҙәлеп яуап бирә. Ул нимә эшләй? Етәксеһенә ялағайланырға тырышамы йәки үҙенең һалҡынлығын уйлап сығарылған ҡорма менән ҡаплаймы? Был мөһим түгел. Ир-ат күҙлегенән ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙ үҙе үк хеҙмәт урынында ир-егеттәрҙән түбән урын биләүен күрһәтә.

Шул уҡ етәксе менән һөйләшкән икенсе ҡатын-ҡыҙға ҡарайыҡ. Ул "хәүефһеҙ" арауыҡта тора, күҙҙәре тура, тыныс, һаран ғына ишаралар яһай. Әңгәмәсе һөйләгәндә ул уны иғтибарлап тыңлай, әммә һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә генә ихтирамлы ҡыҙыҡһыныу күрһәтә. Был ҡатын хәл-торош менән идара итә, ир-атта әһәмиәтле кеше тәьҫоратын ҡалдыра.

Әгәр һеҙ кейәүҙә түгел икән, быны икенсе сағыштырыуҙа аңлауы еңелерәк буласаҡ. Ниндәйҙер кисәлә тормош иптәше булырҙай кандидатураны осраттығыҙ, ти. Һеҙ уға нисек тә яҡынырәк булырға, уның ҡулына ҡағылырға тырышаһығыҙ. Теләһә ниндәй күҙәтеүсән кеше янбаштарығыҙҙы саҡ ҡына тирбәлтеп атлағанығыҙҙы ла һиҙер. Бындай хәрәкәттәр менән, гүйә, һеҙ: "Мин һинеке", - тиһегеҙ.Үкенес, ул быға иғтибар ҙа итмәй...

Нәфислек һәм ижади һәләттәр араһында дөрөҫ баланс булдырыу өсөн ҡатын-ҡыҙға был теләкте көндәлек аффирмациялар менән нығытырға һәм уны йышыраҡ ҡулланырға кәрәк.

● Мин ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-аттар менән берлекте ихлас тоям. ● Мин улар араһындағы айырмалыҡҡа ихтирам менән ҡарайым. ● Мин бөтөн халыҡты бер ғаилә тип иҫәпләйем.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 22 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Годунов". [16+]
1.05 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 Д/ф "Археостан". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**17.30 Автограф. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Близкие контакты". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**4.45 Честно говоря. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

## 23 АВГУСТА ВТОРНИК

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Годунов". [16+]
1.05 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 Д/ф "Археостан". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Дела и люди. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Короли льда". [6+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Убей меня голубчик". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

## 24 АВГУСТА СРЕДА

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Годунов". [16+]
1.05 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 Д/ф "Археостан". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Сулпылар". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Мистер Феличита". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Таштуғай". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**
**6.10 "Утро России".**

## 25 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Т/с "Годунов". [16+]
1.05 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!" [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 Д/ф "Археостан". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Книга сказок". [0+]**
**15.30 "Аҫылташ". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**23.30 Х/ф "Любовь и кухня". [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**4.00 Х/ф "Любовь и кухня". [16+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**
**6.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.**

## 26 АВГУСТА ПЯТНИЦА

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Х/ф "Майор Гром: Чумной доктор". [12+]
23.55 Х/ф "Вторжение". [12+]
2.00 "44-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное открытие".
3.15 Х/ф "Земля Эльзы". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Ышан". [12+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Презентация Межрегионального поэтического конкурса "Минең Рәми".**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [12+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Йома". [0+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 БашГост. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Х/ф "1+1. Нарушая правила". [16+]**
**2.00 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**4.45 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

## 27 АВГУСТА СУББОТА

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.35 Т/с "За счастьем". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Когда меня не станет". [12+]
0.50 Х/ф "Слёзы на подушке". [12+]
3.55 Х/ф "Соучастники". [12+]
5.32 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.00 "Это моя профессия". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.15 Ко дню рождения Героя России Минигали Шаймуратова. [6+]**
**11.30 Концерт ко дню рождения Героя России Минигали Шаймуратова. [0+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Спектакль "Шаймуратов генерал". [12+]**
**18.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Церемония закладки гильзы с землей в основание будущего памятника Герою России М. Шаймуратову. [12+]**
**23.45 Историческая среда. [12+]**
**0.15 Новости недели (на баш. яз).**
**1.00 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**4.15 История одного села. [12+]**
**5.15 "Бай". [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

## 28 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

**РОССИЯ 1**

5.35, 3.20 Х/ф "Чужие дети". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 "Большие перемены".
12.35 Т/с "За счастьем". [12+]
18.00 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Южные ночи". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Рождение баита". Юбилейный концерт композитора Данила Хасаншина. [12+]**
**17.45 Спектакль "Однажды в санатории". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Х/ф "На скейте от смерти". [16+]**
**0.30 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**3.00 Историческая среда. [12+]**
**3.30 Х/ф "На скейте от смерти". [16+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Август (Мөхәррәм - Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (24) дүшәмбе | 4:35 | 6:05 | 13:30 | 18:14 | 20:30 | 22:00 |
| 23 (25) шишәмбе | 4:37 | 6:07 | 13:30 | 18:12 | 20:28 | 21:58 |
| 24 (26) шаршамбы | 4:39 | 6:09 | 13:30 | 18:10 | 20:26 | 21:56 |
| 25 (27) кесе йома | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:09 | 20:23 | 21:53 |
| 26 (28) йома | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:07 | 20:21 | 21:51 |
| 27 (29) шәмбе | 4:44 | 6:14 | 13:30 | 18:05 | 20:18 | 21:48 |
| 28 (1) йәкшәмбе | 4:46 | 6:16 | 13:30 | 18:03 | 20:16 | 21:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Полиартрит менән яфаланғанда ла кишер һабағы ярҙамға килә, уның төнәтмәһендә сылатылған компресты 1:1 нисбәтендә һыуан менән сиратлатып та һыҙлаған урынға ябырға була.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 27 АВГУСТ - РӘСӘЙ КИНОҺЫ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**32-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Келәм. Эверест. Ауырыу. Көркәк. Эбола. Ысыҡ. Илиада. Алым. Браконьер. Сана. Аран. Ишәк. Денали. Скаут. Ике. Авто. Джая. Огайо. Оран. Аят.

**Вертикаль буйынса:** Эльбрус. Аконкагуа. Афродита. Эйәр. Винсон. Ырыу. Ерек. Киото. Ара. Гена. Һаҡал. Ел. Мәсет. Йорт. Килиманджаро. Синод. Куба. Калахари.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!



# ҺАБАҠТАРЫ ЛА ШИФАЛЫ

**Әлеге ваҡытта йорт яны участкаларында, баҡсаларҙа тулып ултырған йәшелсә һабаҡтарының файҙаһы тураһында һөйләмәксебеҙ.**

Ғәҙәттә, беҙ уларҙы ташлайбыҙ. Ләкин йәшелсә һабаҡтарының беҙ белеп етмәгән серҙәре - шифалы үҙенсәлектәре бар. Мәҫәлән, редис һабағын йыуып, киптереп, онтаҡлап алһаң, аяҡтағы бәшмәк сиренә ҡаршы бына тигән дауа сараһы килеп сыға. Был онтаҡты даими рәүештә сирле урындарға һибеп торһаң, бер-ике аҙнанан бәшмәктән ҡотолорға була. Онтаҡты йым ябылған ҡоро банкала һаҡлағыҙ.

Ә бына кишер һабаҡтары геморройға ҡаршы уңышлы сара. Ваҡлап киптерелгән 1 стакан онтаҡты 200 мл ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт тотҡас, һөҙөп, көн оҙоно йотомлап эсеп бөтөргә. Бынан тыш, ошо төнәтмәлә сылатылған тампонды төнгөләккә геморрой яраһына ҡуйырға. Көн һайын шулай эшләгәндә, геморройҙың эҙе лә ҡалмаҫ.

Кишер һабағы төнәтмәһенә петрушка япраҡтары ҡушып төнәтелгән шифаны эсеп, циститты ла еңергә була. Бер тотам кишер һабағын ярты литр һыуҙа 10 минут ҡайнатып эсеү ҙә файҙа бирә. Бер-ике тотам һабаҡты 1 литр ҡайнар һыуҙа 30-40 минут төнәтеп, көнө буйы сикләүһеҙ эсеү аналыҡтан ҡан килеүҙе туҡтата. Көн һайын йылы ванна йә мунсанан һуң кишер һабағын күп һалып әҙерләнгән ҡайнатмала сылатып, эс аҫтына компресс эшләп һәм уны иртәнсәккә тиклем тотҡанда, был бөйөр һәм бәүел ҡыуығынан таш һәм ҡомдо ҡыуҙыра.

Полиартрит менән яфаланғанда ла кишер һабағы ярҙамға килә, уның төнәтмәһендә сылатылған компресты 1:1 нисбәтендә һыуан менән сиратлатып та һыҙлаған урынға ябырға була. Был юл менән дауаланыу һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрһә лә, сирҙе еңер һәм онотор өсөн бөтөн түҙемлекте туплларға кәрәк буласаҡ.

Сөгөлдөр һабағы ла ифрат шифалы. Унда аскорбин һәм фолий кислоталары, B1, B2, P, PP, тимер, калий, магний һәм йод бар. С витамины һабаҡта сөгөлдөрҙөң үҙенә ҡарағанда бер нисә тапҡырға күберәк. Бына шуның өсөн дә сөгөлдөр һабағын даими ҡулланыу шәкәр диабеты, йөрәк-ҡан тамырҙары, аҙ ҡанлылыҡ һәм ҡалҡан биҙе сирҙәренән ярҙамға килә. Сөгөлдөр япраҡтарын турама, борщ, кәтлиттәргә ҡушырға, унан голубцы, ҡоймаҡ, хатта бәлеш бешерергә мөмкин. Сөгөлдөр һабаҡтарын киптерергә, тоҙларға, консерваларға мөмкин. Сөгөлдөр япрағын ыуалап, маңлайға, сикәләргә баҫыу баш ауыртыуын, ә төйгөсләп иҙелгән япраҡтарынан сылатма күҙҙәрҙең елһенеүен бөтөрә.

Һипкелдәр һәм пигмент таптарҙы бөтөрөү өсөн дә алдан сода иретмәһе һөртөлгән тирегә ваҡланған сөгөлдөр япраҡтары һалып тотоу һөҙөмтә бирә. Ә инде киптереп ваҡланган 1 ҡалаҡ һабаҡ һәм япраҡтарҙы бер стакан ҡайнар һыуға һалып, 2-3 минут һүрән генә утта ҡайнатып алғас, уны тигеҙ өлөштәргә бүлеп, көнөнә 4 тапҡыр эсеү эс ҡатыуҙан ҡотолдора. Сәләмәт булығыҙ!

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ

# ЮБИЛЕЙЛЫ ИЖАД МИҘГЕЛЕНӘ

**Салауат дәүләт башҡорт драма театры коллективы юбилейлы ижад миҙгеленә әҙерләнә. Театр хеҙмәткәрҙәре өсөн йәйге отпуск осоро тамам, улар яңы көс туплап эшкә сыҡты һәм йыйылышып, яңы бурыстар, пландар буйынса фекер алышты.**

Театр директоры Айбулат Ҡотошов актерҙарҙы яңы ижади миҙгел башланыу менән ҡотланы һәм коллективты тулыландырған яңы ағзалар - күп йылдар А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында эшләгән Башҡортостандың халыҡ артисы Юнир Ғәйнуллин, ике йәш артист, К.Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжын тамамлаусы Артур Тажетдинов һәм Гөлкәй Хәсәнова менән таныштырҙы.

Салауат театрының баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллина пландар менән бүлешеп, репертуар төрлө йәштәге тамашасы ихтыяждарынан сығып төҙөлөүен әйтте. Әлбиттә, мәҙәниәт усағы өсөн төп ваҡиға - ул театрҙың 90 йыллыҡ юбилейы, иҫтәлекле датаны 2023 йылдың аҙында билдәләү ҡаралған. Быйыл беҙҙең ҡала театры Рәсәйҙең Театр эшмәкәрҙәре союзы ойошторған "Театрҙар өсөн белгестәр" проектының еңеүселәре иҫәбенә инде һәм 1 сентябрҙән 4-нә тиклем режиссер, Н.С.Михалковтың Кинематография һәм театр сәнғәте академияһы, Заманса сәнғәт институты педагогы Мария Шмаевич килеп, Салауат һәм Стәрлетамаҡ театрҙарында артистар өсөн оҫталыҡ дәрестәре уҙғарасаҡ. Бынан тыш, Салауат башҡорт драма театрының А. Житковский пьесаһы буйынса ҡуйылған "Һырғалаҡ" спектакле "Федерация" Бөтә Рәсәй милли театрҙар фестиваленән афишаһына индерелгән. Сара 11-19 сентябрҙә Чечен Республикаһының Грозный ҡалаһында уҙасаҡ. Театр тамашасылары өсөн тағы ла бер шатлыҡлы яңылыҡ бар: артистар тиҙҙән филология фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Саламатова инсценировкаһында Хәбибулла Ғәбитовтың "Ынйыҡай һәм Юлдыҡай" спектаклен сәхнәләштереүгә тотона. Уның ҡуйыусы-режиссеры - Рөстәм Хәкимов. Юбилейлы 90-сы ижад миҙгелен ҡала театры 13,14 октябрҙә асасаҡ.

**Динә БӘШИРОВА.**

*✓ Илле итәктән алды, алтмыш аяҡтан алды, етмеш йүгән һалды, һикһән һикегә йыҡты, туҡһан туңҡайтып һалды, йөҙ өҙөп алды.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАР...

## "Башҡортостан" концерт залына килһен



**28 августа "Башҡортостан" дәүләт концерт залы баш ҡала халҡын асыҡ ишектәр көнөндә көтә. Сара тураһында концерт залының художество бүлеге мөдире Рафаэль СӘҒИТОВтан һораштыҡ.**

**Асыҡ ишектәр көнөнөң төп саралары ниндәй буласаҡ?**

- "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы асыҡ ишектәр көнөн йыр-бейеүгә һәләтле, сәнғәткә ғашиҡ балалар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн үткәрә. Сара бина алдындағы майҙансыҡта башланасаҡ. Урамда халыҡты ылыҡтырғыс төрлө саралар ойоштороруға ниәтләйбеҙ, улар араһында махсус фото төшөү урыны, йәрминкә, ҡул эштәре оҫталарының ҙур булмаған күргәҙмәһе, кеше буйлыҡ ҡурсаҡтар менән тамаша һәм башҡалар буласаҡ. Шунан бөтә теләүселәр өсөн беҙҙә эшләгән 13 алдынғы ижади түңәрәктә шөғөлләнеүселәр бушлай концерт ҡуясаҡ. Коллективтар үҙҙәренең иң сағыу сығышын тәҡдим итә. Ә инде тамаша тамамланғас, фойела һәр ижади коллективтың айырым ҡуйылған өҫтәле янына барып, күңелгә яҡҡан түңәрәкте һайлап, быға бәйле барлыҡ мәғлүмәтте белешеү, аралашыу, танышыу мөмкинлеге биреләсәк. Бынан тыш, сарала ҡатнашыусыларҙың күбеһенә 2 тапҡыр килеп, бушлай шөғөлләнеүгә сертифакаттар таратасаҡбыҙ. Уны алып өлгөрмәгәндәр ҙә һис бошонмаһын: беҙҙә беренсе дәрес һәр ваҡыт бушлай. Был балалар үҙенең күңеленә яҡҡан шөғөлдө, түңәрәкте һайлап алһын өсөн үткәрелә.

"Башҡортостан" залы ҡарамағында эшләп килгән әүҙем түңәрәктәр араһында ике-өс тиҫтәнән ашыу тарихы булғандары ла, "йәшерәктәре" лә бар. Мәҫәлән, Гүзәл Исламғолова етәкселегендәге "Guzal-Dance" бейеү ансамбле күптән түгел беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итә башланы. Был бейеү коллективының үҙенсәлеге шунда - тик ҡыҙҙар ғына шөғөлләнә. Гүзәл Рәшит ҡыҙы ҡыҙҙарға бейеүҙәрҙе һәр ваҡыт башҡорт халҡының тарихына, боронғо ижадына нигеҙләнеп һала һәм уны еренә еткереп башҡарырға өйрәтә. Хореограф хатта йәш ҡыҙҙарҙың рухи, әҙәп-әхлаҡ тәрбиәләренә лә айырым иғтибар бүлә. Әйткәндәй, быға тиклем өлкәнерәк йәштәгеләр менән генә эшләһә, быйылдан башҡорт бейеүҙәрен өйрәнергә теләгән 4-5 йәшлек ҡыҙҙарҙы ла ҡабул итәсәк.

Шулай уҡ беҙҙә Илшат Фәсхетдинов етәкселегендәге "Шаян" халыҡ бейеүҙәре халыҡ ансамбле эшләй, унда шөғөлләнгәндәр донъя халыҡтары бейеүҙәрен өйрәнә. Башҡорт эстрадаһы менән тығыҙ хеҙмәттәшлек иткән "Гранде" ритм-балет эшләй. Заманында Ася Тотманова нигеҙ һалған коллективты хәҙер уның ҡыҙы Альбина Кондратьева етәкләй. "Гранде"ла шөғөлләнеүселәр төрлө сараларҙа иң беренсе йөрөйҙәр, быға тиклем Нәзифә Ҡадырова, Иҙел Нурғәлин, Алтынай кеүек билдәле йырсыларҙың сығыштарын биҙәп бейегәндәре булды. Тағы ла "Вираж" бал бейеүе халыҡ ансамбле оҙаҡ йылдар эшләп килгән коллективтарҙың береһе. Хәҙерге көндә уны Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әлфиә Саттарова етәкләй. Төрлө заман бейеүҙәрен өйрәнергә "Ассоль" өлгөлө вокал-хореография студияһы, "Кредо" эстрада балеты, "Своими ногами" заман хореографияһы халыҡ театры, "Дива" экзотик бейеү халыҡ студияһы, "Ренессанс" бейеү театры эшләй. Театр сәнғәте нескәлектәренә төшөнөргә, актер һөнәренә тәүге аҙымдар яһарға "Третье поколение" халыҡ театры һәм "Лики" театр оҫтаханаһында ярҙам итәләр. Шулай уҡ "Чудетство" балалар эстрада йыр театры, "Дельфин" вокал студияһы эшләй. Ҡыҙғанысҡа күрә, тик башҡорт йырсыларын үҫтереүгә йүнәлтелгән түңәрәк юҡ, әммә ошо эшләп килгән вокал студиялары сиктәрендә айырым башҡарыусыларға башҡортса йырҙар өйрәтеп, сәхнәгә сығарыуға иғтибар бүленә. Киләсәктә тулы ҡанлы башҡорт вокал түңәрәген ойоштороу хыялы менән дә янабыҙ.

Был телгә алып киткән һәр ижади коллектив бик әүҙем эшләй, унда шөғөлләнеүселәр төрлө кимәлдәге конкурс, фестивалдәрҙә йыш сығыш яһай, ҡала һәм республика кимәлендәге әһәмиәтле сараларҙа профессиональ артистар менән бергә сәхнәгә күтәреләләр. Мәҫәлән, сентябрь-октябрь айында килгән балалар декабрҙә бер бейеү ҡуйып булһа ла ҙур концертта сығыш яһарлыҡ оҫталыҡ туплай.

**Балаларҙы нисә йәштән бындай түңәрәктәрҙә шөғөлләндерә башларға кәңәш итәһегеҙ?**

- Был йәһәттән бөтәһе лә бер төрлөрәк йәш арауығын - 4-5 йәштән алып тигәнде билдәләйҙәр. Мин үҙем өс бала атаһы булараҡ та ышаныслы әйтә алам: 4 йәше тулған бала өйҙән дә, балалар баҡсаһынан да ялҡа һәм ошо ваҡытта уға артабан үҫешер өсөн яңы мөхит, яңы мөмкинлектәр тыуҙырыу мөһим. Был йәштә улар төрлө мәғлүмәтте шул тиклем тиҙ үҙләштерә, хатта берәй шиғыр уҡыһаң да отоп алырға ғына торғанын һиҙгәне барҙыр атай-әсәйҙәр. Шуға баланың һәләтенә, теләгенә ҡарап, берәй түңәрәккә йөрөтә башлау яҡшы. Ул яңы һөнәр үҙләштерә, һәләтен арттыра һәм мәктәпкә уҡырға барғас та кеше араһында үҙен тота белә, оялмай, сәхнәгә күтәрелә. Уға, үҫкәс, мотлаҡ йырсы, бейеүсе йә актер булырға тимәгән, ә дөйөм үҫеш өсөн булһа ла мөһим был. Ҡыҫҡаса бына шулай. "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы ижади коллективтарының эшмәкәрлеге менән яҡынданыраҡ беҙҙең рәсми сайтта, "Ютуб"тағы каналдан ҡарап таныша алаһығыҙ. Барығыҙҙы ла асыҡ ишектәр көнөндә көтөп ҡалабыҙ!

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ

# ҠАҘАҒСТАНДА...

**Ҡаҙағстандың Кустанай ҡалаһында беренсе тапҡыр башҡорттарҙың "Йыйын" байрамы үтте. Күләмле сараны "Башҡортостан Республикаһының Конгресс-бюроһы" ойошмаһының Ҡаҙағстан Республикаһындағы вәкиллеге булышлығында "Азатлыҡ" башҡорт этномәҙәни берләшмәһе ойошторҙо. Йыйын күңелле байрам менән тамамланды, унда бихисап ҡунаҡтар саҡырылғайны.**

- 2022 йылдың тәүге ярты йыллығы йомғаҡтары буйынса Ҡаҙағстан Башҡортостандың сауҙа партнерҙары араһында тәүге унау иҫәбендә ҡала. Министрлыҡтың сит ил аппараты халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте һәм тышҡы иҡтисади бәйләнештәрҙе көсәйтеүҙән тыш, халыҡ-ара гуманитар хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә, сит илдәрҙә башҡорт мәҙәниәтен һаҡлауға һәм популярлаштырыуға булышлыҡ итеүгә, вәкил ебәрелгән илдә Башҡортостанды танытыу өҫтөндә эшләүгә йүнәлтелгән, - тине Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева.

Кустанайҙа Башҡортостан Республикаһының Сибай ҡалаһы филармонияһы артистары сығыш яһаны. Шул уҡ көндә спорт һәм традицион ярыштар, халыҡ уйындары ойошторолдо. Урындағы халыҡ шулай уҡ Башҡортостан продукцияһы менән таныша алды. Йәрминкәлә башҡорт балы, шифалы үләндәр, сироптар һәм башҡа тауарҙар һатып алырға мөмкин ине.

- Хәҙер Кустанайҙа ла "Йыйын" байрамын йыл һайын уҙғарырҙар тип ышанам. 28 августа Нур-Солтанда "Йыйын"ды өсөнсө тапҡыр үткәреү планлаштырыла, - тине былтыр 29 сентябрҙә Нур-Солтан ҡалаһында ойошторолған вәкиллектең - "Офис-төркөм" Башҡортостан Республикаһы Конгресс-бюроһы" ойошмаһы етәксеһе Урал Аҙнабаев.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАН ЕГЕТ БИЛДӘҺЕ...

## ҡатын алмаҫ, мал йыйыр

Илле итәктән алды, алтмыш аяҡтан алды, етмеш йүгән һалды, һикһән һикегә йыҡты, туҡһан туңҡайтып һалды, йөҙ өҙөп алды.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр кем, Алла уның янында, тип уйлай, ә байҙар һәм уңышлы кешеләр был турала уйлап ҡына ҡалмай, белә.

**(Жан Ануй).**

Хыялланыуҙан туҡтағас, һеҙ хәҡиҡәтте табасаҡһығыҙ һәм аҡыллыраҡ була башлаясаҡһығыҙ.

**(Людвиг Берн).**

Яуызлыҡ һәм изгелек күктән төшмәй, уларҙы беҙ үҙебеҙ тыуҙырабыҙ.

**(Джон Апдайк).**

Үҙ ғүмерендә изгерәк булырға ла, яуызыраҡ булырға ла ынтылмаған кешеләр күберәк яуызлыҡ ҡыла.

**(Ханна Арендт).**

Кеше ғәжәп йән эйәһе: ул үҙендә аттың ҡыҙыулығын, ишәктең үҙһүҙлеген, дөйәнең хәйләкәрлеген туплаған.

**(Томас Хаксли).**

Кешенең матур һүҙ һөйләр өсөн аҡылы етмәһә, йә өндәшмәй ҡалыр өсөн донъяуи тәжрибәһе булмаһа - оло бәлә.

**(Жан де Ларюйер).**

Сәнғәт тәбиғәттәге етешһеҙ урындарҙы көйләй һәм тулылындыра.

**(Джордано Бруно).**

Кешеләр менән һөйләшмәйенсә, Хоҙай менән генә һөйләшергә ынтылған кешенең һүҙҙәре бушлыҡҡа китә.

**(Мартин Бубер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡатын иренә үпкәләй ҙә, ата йортона ҡайта ла килә, ҡайта ла килә икән. "Кейәүегеҙ менән насар йәшәйбеҙ, ул мине рәнйетә", - тип зарлана икән үҙе ата-әсәһенә. Бер көндө әсәһе иренә үпкәләп ҡайтҡан ҡыҙына бер төймә бирә һәм шулай ти: "Бына һиңә тылсымлы төймә, ирең ҡайтып инеп, тауыш күтәрә башлаһа, ошо төймәне ауыҙыңа ҡап та, ишетмәмеш булып тик йөрө..." Ҡатын әсәһе өйрәткәнсә эшләй: ире нисек кенә талаш сығарырға тырышмаһын, төймәне ҡаба ла, уның тылсымын көткәндәй, өндәшмәй тик йөрөй. Ҡатынының өнө сыҡмағас, ире лә, туҙына-туҙына ла, тиҙ генә һыуына һала. Шулай тыныс, татыу, бәхетле йәшәп киткән был ғаилә. Төймә ҡабығыҙ".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22033

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт: Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 18 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3007
Заказ - 1037